*Һәр ишеткәнегеҙҙе һөйләп йөрөмәгеҙ. Һүҙегеҙҙе артыҡ оҙон итмәгеҙ. Зарур булмаһа, ҡайғылы һүҙҙәр һөйләмәгеҙ һәм һис кемгә урынһыҙ ҡаршы һөйләмәгеҙ. Үҙегеҙҙән һәм башҡаларҙан шикәйәт итеп ултырмағыҙ. Асыуланырға ашыҡмағыҙ.*

*РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға. Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

4 - 10 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2009 ЙЫЛ

№27 (341)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дуҫлыҡ ҡулынды кемгә һонаһың -**

этҡәме, бүрегәме?



2

**Мохтажһыҙ ҡартлыҡ...**

әкиәт булмаясаҡ



5

**Рухи бөтөнлөк тыуҙырыуға...**

күркәм холоҡ булышлыҡ итә



8-9

**Мин эсеүемде ташланым**




13

**ТВ программа**

14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Н.Н. Миклухо-Маклай исемендәге Рәсәй академияһының Этнология һәм антропология институты "РФ дәүләт милли сәйәсәте нигеҙҙәре тураһында"ғы Федераль Закон концепцияһы проекты әҙерләгән. Шунан сығып һорау:**

### Концепция проектында "күп милләтле РФ халҡы" тигән төшөнсәне "Рәсәй граждандар милләте" тигән термин менән алмаштырыу ҡарала. Быға мөнәсәбәтегеҙ нисек?

*Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН, философия фәндәре докторы, академик:*

- Концепцияла Рәсәй Федерацияһы дәүләтселеге нигеҙенә балта сабыла, йәғни унның формалашыуының федератив принциптары, республикаларҙың үҙ ирке менән бер ҡорға ойошоу факты инҡар ителә. Был документты әҙерләүселәр Рәсәй Федерацияһы нисек барлыҡҡа килгәнен онота. Асылда, концепция проекты Рәсәйҙе дәүләт булараҡ ғәмәлдән сығарыуға йүнәлтелгән. Ни өсөн тигәндә, бындай хәл XX быуатта бер булды бит инде, "берҙәм совет халҡы" төҙөргә теләгән Советтар Союзы дәүләтселеге үҙенән-үҙе емерелде. Беҙҙә дәүләт суверенлығы төшөнсәһенән шундуҡ шәхес терминына күсеп, халыҡтың башын бутарға тырышалар. Әгәр ҙә дәүләт айырым шәхестәрҙән ҡоролған булһа, был хәл дөрөҫ һәм аңлайышлы булыр ине, ә бит беҙҙә, бәхеткә күрә, этностар, этник төркөмдәр бар. Рәсәй Федерацияһы, дәүләт булараҡ, шул берәмектәрҙән формалашҡан.

*Нәзир КОЛБАХТИН, тарих фәндәре докторы, профессор:*

- Төбәк компоненты мәсьәләһе лә ошо концепция менән бәйле. Рәсәй Федерацияһының милли республикаларын юҡҡа сығарыу эшенә әҙмә-әҙлекле тотоноуҙы аңлата был. Башҡорт дәүләт университетының 2009-2010 уҡыу йылы пландарында ла төбәк компоненты һиҙелерлек ҡыҫҡартылған. Шуға күрә беҙгә федераль власҡа үҙебеҙҙең һүҙҙе туранан-тура әйтергә ваҡыт етте. Манилов һымаҡ буш хыялдар менән йәшәү заманы үтте хәҙер. Был концепция Рәсәй Федерацияһын, дәүләт булараҡ, юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән икән, әгәр ҙә Рәсәй унитар дәүләт булырға ынтыла һәм был хәл ҡотолғоһоҙ икән, беҙ ҙә үҙебеҙҙең талаптарҙы ҡуйырға, ҡайһы бер белдереүҙәр яһарға тейешбеҙ.

*Әмир ШАМАЕВ, медицина фәндәре докторы, профессор:*

-Концепция Рәсәй Федерацияһы составындағы милләттәрҙе инҡар итеүгә, уларҙың хоҡуҡтарын танымауға ҡорола икән, был милләттәр үҙҙәренең суверенлы дәүләттәрен төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуясаҡ. Был хәл инде Рәсәйҙе йөҙҙәрсә өлөштәргә бүлгеләүгә, ҙур хаосҡа килтерәсәк. Беҙгә Рәсәй властарына үҙебеҙҙең фекерҙе ҡатыраҡ итеп әйтергә кәрәк. Концепцияла хатта "милләт" һүҙе урынына "төбәк" һүҙен ҡулланғандар.

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

**Әйткәндәй...**

**30 июндә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) башҡарма комитетының ултырышында РФ Федераль Законы концепцияһы проекты ҡаралды һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы менән Бөтә донъя татарҙары конгресы әҙерләгән берлектәге мөрәжәғәт ҡабул ителде.**

## ТУҠТА, МӘЛ!




## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

### ИРҘӘР ҮЛЕП БӨТӘ, ТИҘӘР...

Йөҙ илле йылдан Ер йөҙөнән ир затының юғалыуы мөмкин, тигән хәүефле мәғлүмәт тарала башлаған икән. Бының өсөн берәй ерлек бармы һуң? Ни сыҡһа, шул генетиктарҙан сыға бит ул, ана, дәшһәтле Сталин да уларҙан ендән ҡурҡҡандай шөбһәләнгән бит. Әле генә кешене клонлаштыра алабыҙ, тип шаҡ ҡатырһалар, хәҙер ирҙәр юҡҡа сығып бара, тип ҡурҡыталар.

Иң тәүҙә Австралия генетиктары саң ҡаға башлаған икән. Улар әйтеүенсә, ир затын булдырыусы Y-хромосома аҙая барып, киләсәк быуындарға һирәгерәк бирелә, ти. Әгәр кеше геномында тик X-хромосомалар ғына ҡалһа, ҡатын-ҡыҙ ғына тыуа башлаясаҡ. Киев генетигы Вячеслав Коновалов кеҫәрткеләрҙең аталаныуҙан башҡа ла үрсей алыуы тураһында хәбәр итә. Бер инә кеҫәрткенең икенсе инә кеҫәрткегә ышҡыныуы ла уларҙа элек тик ата кеҫәрткеләрҙә була торған гормондарҙы әүҙемләштерә алып, уларһыҙ ҙа үҙ нәҫелен үрсетә алыу мөмкинлеген бирә икән. Тик кеҫәртке - кеҫәртке инде ул, уларға төҫтәре ал булһа ла, зәңгәр булһа ла, барыбер. Ҡойроҡтары өҙөлһә лә, бар тип тә белмәйҙәр. Минеңсә, кешеләргә, шул иҫәптән ир затына ла, Аллаһы Тәғәлә биргән ҡәҙимге енси йүнәлештән яҙыу хәүефлерәктер. Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң бит ул: аҙған-туҙғанды юлдан яҙҙырһа, иманлыларҙы түлле итеп, ул-ҡыҙ бағыуҙан һис яҙҙырмаҫ, тип ышанайыҡ.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДҮРТ КӘҢӘШ

Гонаһлы бер кеше йәшәгән. Гонаһ эшләмәҫкә, тип, үҙ-үҙенә нисек кенә һүҙ бирһә лә, яман ғәҙәттәренән һис ҡотола алмаған. Бына ул ҙур белемгә эйә һәм Исламға ҡәтғи эйәреүсе берәй кешене табып, кәңәшләшергә ҡарар итә. Уға Ибраһим бин Әтһәмгә мөрәжәғәт итергә кәңәш биргәндәр. Гонаһлы кеше Ибраһим бин Әтһәмгә килеп, былай тип үтенгән:

- Мин үҙемдең насар ғәҙәттәремдән бер нисек тә арына алмайым. Миңә башҡаса нисек итеп гонаһ эшләмәҫкә - кәңәш бирсе.

- Мин һиңә дүрт кәңәш бирәм. Әгәр ҙә шуларҙы һәр ваҡыт иҫеңдә тотһаң, ул сағында Аллаһы Тәғәлә һиңә насар ҡылыҡтан ҡотолорға ярҙам итер, - тип яуаплаған Ибраһим бин Әтһәм.

Был кеше бик шатланған һәм иғтибар менән тыңлай башлаған:

- Һиңә беренсе кәңәшем шул: ҡайҙа ғына булһаң да, нимә генә эшләһәң дә, Аллаһы Тәғәлә һине күреп тора, шуны онотма,- тигән Ибраһим бин Әтһәм. - Икенсе кәңәшем: әгәр һин ниндәйҙер гонаһ эшләйһең икән, Аллаһы биргән аҙыҡты ашама. Шулай булмай бит инде: Уға ышанаһың, Ул биргән ризыҡ менән туҡланаһың, шул уҡ ваҡытта Уның ихтыярына ҡаршы бараһың...

Ошонан һуң Ибраһим бин Әтһәм кәңәштәренең гонаһлының йөрәгенә барып етеүен бер ни тиклем ваҡыт көтөп торған.

- Ә өсөнсө кәңәш ниндәй? - тип һораған гонаһлы.

Ибраһим бин Әтһәм тыныс тауыш менән дауам иткән:

- Минең өсөнсө кәңәшем шул: тағы ла гонаһ эшләгең килһә, был донъя һәм унда булған бөтә нәмә Аллаһы Тәғәләнеке икәнен иҫеңә төшөр. Әгәр ҙә йәнә лә гонаһ эшләһәң, ул сағында һин Аллаһы биләмәләрендә ҡалма, шунда уҡ үҙеңә икенсе урын эҙлә...

Гонаһлы кеше ишеткән кәңәштәрҙән тотлоға башлай:

- Нисек башҡа урынға китәйем, бөтәһе лә Аллаһтыҡы бит...

Ибраһим бин Әтһәм уның күҙҙәренә туп-тура ҡарап, ҡыҫҡырып ебәргән:

- Бына нисек була ул рәхмәтле була белмәү! Мәрхәмәтһеҙлек бит был! Һин Уның биләмәләрендә йәшәйһең, һәм һин Уға ҡаршы барырға теләйһең!

Ибраһим бин Әтһәм әйткән һүҙҙәр гонаһлы кешене ныҡ тулҡынландырған һәм ул тотлоға-тотлоға дүртенсе кәңәште әйтеүен үтенгән.

- Үлем сәғәте еткәс, Ғәзраил фәрештә һинең йәнеңде алырға киләсәк. Һин шул ваҡытта уға ошо һүҙҙәрҙе әйт: "Эй, Ғәзраил! Һин ваҡытһыҙ килдең. Һин мин гонаһтарыма тәүбә итеп бөткәс кил. Әлегә миңә Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылырға һәм унан ғәфү итеүен һорарға кәрәк", - тип яуап биргән Ибраһим бин Әтһәм.

- Улай булмай инде! Мин нисек Ғәзраилдан шулай тип һорай алам? Ул килгәс, мин инде бер ни ҙә эшләй алмаясаҡмын...

Ибраһим бин Әтһәм үҙенең нәсихәтен тамамлап, былай тигән:

- Эй, кеше! Беләһең бит, Аллаһы Тәғәлә һине күреп тора. Ул биргән аҙыҡ менән туҡланаһың. Уның биләмәләрендә йәшәйһең. Үлем фәрештәһе килгәндә, әлбиттә, унан үлемде кисектереп тороуын һорай алмаясаҡһың. Шуға ла әле Ғәзраил килмәҫ борон тәүбә ит. Ҡолға нимә ҡушылған, шуны эшлә. Аллаһы Тәғәләгә яҡынайырға, яҡшы, әҙәпле һәм ғибәҙәт ҡылыусыларҙан булырға тырыш.

Ишеткән дүрт кәңәш гонаһ ҡылыусыны тулҡынландырған һәм ул ҡысҡырып илаған. Үҙенең гонаһтарына тәүбә итә башлаған һәм шул көндән башлап гонаһ эшләүҙән туҡтаған. Бөтә йәне һәм йыйылған мөлкәте менән Исламға хеҙмәт итә башлаған. Үҙенең элекке таныштарын ташлаған, Ибраһим бин Әтһәмдең уҡыусыһы булып киткән һәм үҙенең белемен үҫтергән. Элекке гонаһлы мөхитте алмаштырып, тиҙҙән изге эштәр башҡара башлаған.

**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

ШАҢДАУ



# ДУҪЛЫҠ ҠУЛЫҢДЫ КЕМГӘ ҺОНАҺЫҢ -

## эткәме, бүрегәме?

**Әхмәр Үтәбайҙың "Киске Өфө"нөң 23-сө һанында "Парадокс" рубрикаһында баҫылған "Дуҫың ниндәй - ҡәҙерең шундай" тигән мәҡәләһе күптәрҙе уйға һалғандыр.**

Быуаттар буйы дауам иткән ил менән ил дуҫлығының парадоксаль күренеш булыуын тарихты байҡап беләбеҙ. Дуҫлыҡ тәҡдим итеп, йылмайып һуҙған ҡуш ҡулыңды ҡапыл тешләп алыусылар һаман ишәйә. Ил менән ил араһында ғына түгел, күрше менән күрше араһында ла барҙыр бындай "дуҫлыҡ". Әммә беҙ барыбыҙ ҙа һаман дуҫ эҙләйбеҙ, кемгәлер дуҫ булырға тырышабыҙ...

Ысын дуҫлыҡ юҡ, тиһәң, күңел төшөнкөлөгөнә биреләһең, хатта йәшәге килмәй башлай. Мөхәббәт тә, бәхет тә юҡ, тип йәшәү үҙе үк йәшәүҙең мәғәнәһен юҡҡа сығара. Ирекһеҙҙән, А. Пушкиндың шиғри юлдары иҫкә төшә: "Счастья нет - но есть покой и воля..." Дуҫлыҡ та, әгәр ике ара ла ирек һәм азатлыҡ һаҡланһа, бәхеткә тиң бит ул.

Һуғыш тамамланған йылдарҙа емереклекте, аслыкты үткән халыҡ ихлас, эскәрһеҙ булды. "Мәктәпте тамамлайһың да, поезға ултырып, Мәскәүгә йүнәләһең. Унда һине бер төркөм һәйбәт кешеләр көтөп тора", тиер ине билдәле бер актриса. Мин үҙем дә бик яҡшы дуҫтар таптым ул йылдарҙа Мәскәүҙә.

Үҙгәртеп ҡороу йылдары башланғас, ҡапыл байҙар һәм ярлылар барлыҡҡа килде, дуҫлыҡ та үҙгәрҙе. Бына минең бер танышым, бер бүлмәле фатирҙа йәшәгән Венер исемле егет тәүҙә ике бүлмәле, аҙаҡтан өс бүлмәле фатир һатып алды, иномаркала ғына елдерә. Беҙҙең йортта йәшәгән ярлы-ябағаға ҡарап һоҡлана, уны маҡтай, уның менән дуҫ булырға тырыша. Уны күреп ҡалыу менән ауыҙ үҙенән-үҙе йырыла. Ә ул иғтибар ҙа итмәй, уға беҙҙең йорттағыларҙың дуҫлығы кәрәкмәй...

Алланан ҡурҡҡан, уға инанған кешеләр араһында дуҫлыҡ, бәлки, барҙыр. Күршемә элек шырпы һорап керһәң дә әрләп сығара ине, мөкиббән дингә бирелгәс, фатирынан бүләкһеҙ сығармай.

Ысын дуҫлыҡ барҙыр, уны бөтөнләй инҡар итергә тел әйләнмәй. Үҙемдең яҙмышымдан сығып ҡарағанда, ысын дуҫлыҡ балалар йортонда бергә үҫеп, бергә белем алыусылар араһында нығыраҡтыр һымаҡ. Бының сәбәбен бер үк яҙмыштан, бер үк һынауҙарҙы үтеүҙән, бер кимәлдә йәшәүҙән күрәм мин. Булғанына шөкөр итеп йәшәп, ологая уларҙың барыһы ла. Бер тапҡыр өйҙә булмаған сағымда фатирыма бурҙар төшөп, байлыҡ эҙләгән. Аванс алған ғына ваҡыт ине, шул аҡсаны һәм бер бөртөк курткамды алып сығып киткәндәр. Был хәлде ишеткәс, синыфташтарым икенсе көнөнә үк бер айға етерлек ризыҡ һәм аҡса йыйып алып килде. Был айҙа бүтән айҙарға ҡарағанда ла мулыраҡ йәшәнем. Бына шуны ысын дуҫлыҡ тип әйтмәйһеңме инде!?

Рая исемле һөйкөмлө урыҫ ҡатыны бер ваҡиға һөйләгәйне. Тыуған ауылына ял итергә ҡайтҡас, энер төшкәс, йөклар алдынан саф һауа һуларға урамға сыға ул. Шунда ябыҡ ҡына бер овчарканы күреп ҡалғас, кире өйөнә инеп, бер телем икмәк алып сыға. Көтмәгәндә һонолған икмәкте эт Раяның усы менән бергә ауыҙына ҡаба. Ҡатын, ҡурҡышынан, эттең ауыҙы эсендә ҡалған ҡулы менән уның телен эләктереп ала ла, утынлыҡҡа һөйрәп индереп, һул ҡулына балта алып, маңлайына тондора. Ауыҙын асып, ҡатындың ҡулын ысҡындыра ла хайуан йән дә бирә. Бәҡтиһән, эт тигәне бүре булып сыҡҡан икән. Ҡулын дауаханала табиптар дауалай. "Шунан алып яҙыусы Дмитрий Быковтың "Собака друг человека, но об этом знает не каждая собака" тигән әйтемен иҫтә тотоп йәшәйем", тигәйне Рая.

Эйе, тормошта эт тигәнеңдең бүре булып сығыуы ла бар, әлбиттә.

**Дуҫтар һайлағанда, юлдаштар һайлағанда, был әтме, әллә бүреме икәнен яҡшылабыраҡ тикшереп, ҡулыбыҙҙы, икмәгебеҙҙе ышаныслыраҡ кешеләргә һонһаҡсы, тигән теләктә ҡалам мин.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов рәйеслегендә Башҡортостан Республикаһының терроризмға, коррупцияға һәм наркотиктарға ҡаршы комиссиялары ултырыштары булды. Терроризмға ҡаршы комиссия дауалау-профилактика һәм шифахана-курорт учреждениеларының терроризмға ҡаршы яҡланғанлығын тәьмин итеү эшенең торошон, коррупцияға ҡаршы комиссия белем биреү өлкәһендә коррупцияға ҡаршы эш итеү буйынса БР Мәғариф министрлығы эшмәкәрлеген, наркотиктарға ҡаршы комиссия наркоманияны иҫкәртеү мәсьәләһен ҡараны.

✓БР Президенты Беларусь Республикаһының архитектура һәм төҙөлөш министры А. Селезнев менән эш осрашыуы үткәрҙе. Ул Өфөгә Башҡортостан менән ике яҡлы хеҙмәттәшлекте үҫтереү мәсьәләләрен тикшереү өсөн Беларусь Республикаһының рәсми делегацияһы етәксеһе сифатында килгән. Делегация башлығы БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев менән дә эшлекле осрашыу үткәрҙе. Осрашыуҙар һуңында Беларусь делегацияһының Башҡортостанға эш сәфәре һөҙөмтәләре буйынса Протоколға ҡул ҡуйылды.

✓"Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы тураһында" БР Законына ярашлы, Башҡортостан Республикаһы Йәмәғәт палатаһы составы раҫланды. Ул 30 кешенән тора.

✓Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына был юлы Илһам Вәлиев, Зөһрә Бураҡаева, Светлана Ғиниәтуллина лайыҡ булды.

✓Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы советының Өфөлә үткәрелгән ултырышында президиум, рәйес урынбаҫарҙары һайланды. Ассамблея советының башҡарма комитеты, комитеттар ойошторолдо һәм уларҙың ағзалары раҫланды. Ассамблея советы башҡарма комитеты рәйесе күптән түгел булып үткән съезда һайланғайны, ул - БР Фәндәр академияһының вице-президенты Әхәт Мостафин. Әле уның урынбаҫарҙары итеп Вельмир Аҙнаев, Владимир Самородов, Рәил Әсәҙуллин һайланды.

✔ *Беҙҙең эшҡыуарҙар табыш күләме кәмеү менән бер нисек тә ризалаша алмай. Халыҡ барыбер ала ул, тип, хаҡтарҙы арттыра ла арттыра. Һөҙөмтәлә Рәсәй инфляция темптары буйынса Европала өсөнсө урында тора.*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# АҠСА КЕМГӘ ҺӘМ НИШЛӘП ЕТМӘЙ?

## Аҙаплы Шурман, казино, хаҡтар менән көрәшкән Путин һәм Черкизово хужаһы Исмаилов хаҡында уйланыуҙар

**Көрсөк тибеҙ. Баш баҫабыҙ. Уйланабыҙ. Аптыранабыҙ. Ә бит тормош дауам итә. Башығыҙҙы күтәреп ҡарағыҙ әле - һуңғы арала ҡалабыҙ урамдарында йөклө ҡатын-ҡыҙҙар күп. Йәш сабый күтәргәндәрен иҫәпләрлек түгел. Көрсөккә гүзәл заттарыбыҙҙың тос яуабы тип аңларға кәрәктер был хәлде. Ғөмүмән, һәр кем үҙенсә кисерә елкәһенә төшкән иктисади ауырлыктарҙы. Кемдер хатта көрсөктән тәм һәм йәм таба. Миҫалдармы? Рәхим итегеҙ!**

Владивостокта, мәҫәлән, бер эшҡыуар эштән сығарған хеҙмәткәрҙәренә ҡулланылмаған ял өсөн компенсацияны биш тинлектәр менән биргән. Көрсөк сәбәпле эштән ҡыҫҡартылған ҡыҙҙарға 36 мең һум аҡсаны 33 тоҡсайҙа тотторғандар. Баҡтиһәң, фирма етәксеһе үҙенең элекке хеҙмәткәрҙәренән шулайтып үс ала, имеш. Тегеләр уның өҫтөнән хеҙмәт инспекцияһына ғариза яҙғаны өсөн, йәнәһе. Биш тинлектәр булһынмы ул, әллә биш меңлектәрме - барыбер, аҡса үҙ ҡиммәтен юғалтмай бит инде. Әллә улай түгелме?

Пермдән хәбәр шуны раҫламаймы? Был ҡалала 25 июнь көнө Һаҡлыҡ банкы инкассаторы Александр Шурман банк броневигынан 250 миллион һум аҡса сәлдерә. Аҡсаның ауырлығы - 100 килограмм тирәһе. Аңлашыла, был тиклем йөктө яңғыҙы алып китә алмай бит. Тик әшнәләре менән бергә генә. Бер аҙна буйына Пермь милиционерҙары талаусыны эҙәрлекләне. Тәки тотто. Тәүҙә бисәһен - Елена Шурманды, шунан ҡайныһын - Валерий Сәлимйәновты. Ахыры сиктә, бурҙың үҙен. Урманда ҡыуыш ҡороп йәшәп ятҡан булған, бахыр. Аҡсалар ҙа табылды. Бер өлөшө - хәләл ефетендә, икенсеһе - ҡайны ҡартта. Өсөнсө өлөшөн Шурман урманда йәшереп тоҡкан булған. Уғрының тотолоуы, аҡсаларҙың табылыуы ғәжәп түгел. Икенсе бер нәмә аптырата. Ошо хәбәрҙе ишеткән ябай халыҡ Шурманды ғәйепләмәй. Киреһенсә, ысын күңелдән ҡайғыра. Был хәтлем аҡса менән ҡасып ҡотолоп буламы, тигән уйға бата. Һәм... бөтәһе лә бер үк фекергә килә: алдан әҙерләнеп, сит ил паспортын хәстәрләп, ҡиәфәтен үҙгәртеү буйынса операция эшләтһә, Рәсәйҙән ситкә сығып китә ала инде ул! Һәр береһе тиерлек калькуляторҙы ла ҡулланмай ғына 250 миллион һумды долларға йәки евроға күсереп иҫәпләп ҡарай ҙа, был аҡса ғүмер буйына етәсәк бит, тип һығымта яһап ҡуя. Йәғни, берәү ҙә талаусыны енәйәтсе итеп күҙ алдына ла килтермәй. Киреһенсә, был аҡса менән ни эшләргә мөмкин икән, тигән һорауға яуап эҙләйэҙләй, татлы уй-хыялдарға сумалар.

Пермь өлкәһендә ошо ваҡиғаға бәйле социологик тикшеренеү үткәрелгән. Яуап биреүселәрҙең яртыһынан күбеһе Шурманды яҡлап сыҡҡан. Күп кенә кеше уны хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренән йәшереп торорға әҙер булыуын белдергән. Йәмғиәтебеҙгә ниндәй диагноз ҡуйырға кәрәк икән бынан һуң? Урланған 100 килограмм миллиондарға ҡарағанда намыҫлы эшләп алынған 30 кило 5 тинлектәр яҡшыраҡ түгелме шул? Әллә барыберме? Аҡса - аҡса ғына булып ҡаламы?

Һүҙебеҙ аҡса хаҡында башланғас, шул уҡ юҫыҡта дауам итһен дә ҡуйһын инде. Үткән аҙналағы иң мөһим ваҡиғаларҙың береһе - ул уйын салондарының, казинolarҙың ябылыуы булды, шикелле. Күҙ алдығыҙға баҫтырығыҙ әле - 30 июнь көнө бөтә илдә бер юлы тиерлек рулеткалар туҡтап ҡалды, уның эсендә йүгереп йөрөгән шариктар "ял" итә, "бер ҡуллы бандиттар"ҙың ялтырауыҡлы уттары һүнде. Был ул хәтлемде ҡайҙан белә, әллә үҙе лә көнөн-төнөн казиноларҙа үткәрә микән, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, кинофильмдарҙа ғына күргәнем бар. Халыҡ казинoларға йөрөмәй. Күпселектең йәшәргә лә аҡсаһы етмәй. Эйе, уйын салондарына ҡаршы кампания ойошторолғанда уйын автоматтарында пенсияларын отторған әбейҙәр, өйҙәренән барлыҡ аҡсаны ташып "бер ҡуллы бандиттар"ға йотторған бала-сағалар хаҡында күп яҙҙылар. Әммә һөҙөмтәлә ябай халыҡ, бала-саға, үсмерҙәр инеп, һуңғы аҡсаһын ҡалдырған салондар, исем-атамаларын үҙгәртеп, эшләүен дауам итте. Ә байҙар бер ингәндә генә 100 мең һумдарын ҡалдырған эре казинолар ябылды. Ғәжәпме? Ғәжәп. Көрсөк осоронда ил буйлап меңәрләгән хеҙмәткәр - крупьелар, казиноларҙы һаҡлаусылар, йыйыштырыусылар эшһеҙ ҡалды. Улар ҡайҙа барыр ҙа, ни эшләр икән?

Эйе, уйын салондары халыҡтың рухи һаулығын ныҡ ҡына ҡаҡшатты. Һуңғы аҡсаларын отторған кешеләр йәл. Ә тәмәке тартып һәм араҡы эсеп һаулыҡтарын ғына түгел, ғүмерҙәрен юғалтҡан кешеләр йәл түгелме һуң? Ә бит улар менән көрәш әлегә бик һүлпән бара. Тәмәке ҡаптарында яҙылған иҫкәртеүҙәрҙе һәм телеэкрандарҙан араҡы рекламаларын алып ташлау менән генә йәмғиәтте ҡотҡарып алып буламы икән? Әле ваҡытлы матбуғат сараларында спиртты етештереүгә һәм һатыуға дәүләт монополияһын индереү тураһында һүҙ күтәрелә башланы. Уйын салондары һәм казинолар менән көрәш күңел асыу өлкәһен бер ҡулдарҙан икенселәргә күсереп, был үтә табышлы өлкәне ҡабаттан бүлешеп алыу маҡсатында ғына эшләнмәне микән, тигән шик тыуа.

Аҡса тигәс, шунда уҡ хаҡтар иҫкә төшә. Сөнки, аҡса аҙ, ә хаҡтар һәр ваҡыт юғары. Улай ғына ла түгел, улар көндән-көн күтәрелә генә. Бер ҙә төшмәй. Хәйер, яңылышам. Ярты йыл элек беҙҙә бензинға хаҡтар төшә башлағайны. Ай һайын тиерлек йәки ике айға бер яғыулыҡҡа хаҡтар 50 тинләп төшөүе ғәжәп бер күренеш һымаҡ тойолдо. Улай ҙа була икән, тип уйлап та өлгөрмәнек, бензинға хаҡтар ҡабаттан күтәрелде. Шуныһы - төшкәндә 50-шәр тинләп кенә ине, ә күтәрелгәндә - 1-әр һумлап.

Хаҡтар менән хатта Рәсәй Премьер-министры Владимир Путин да ҡыҙыҡһына башланы. Яғыулыҡҡа түгел. Аҙыҡ-түлеккә. Ул хатта сауҙаны ойоштороуға бәйле закон проектын тикшереүгә арналған ултырыш ваҡытында хөкүмәт ағзалары менән берлектә Мәскәүҙәге бер эре аҙыҡ-түлек магазинына барып килде. Ундағы хаҡтарға ғәжәпләнде. Мин иһә үҙ сиратымда уның реакцияһына аптыраным. Эйе, Владимир Владимирович, магазиндарҙа хаҡтар юғары. Үтә юғары. Һәм уларҙы бер нисек тә төшөрөп булмай. Тауар етештереүсе күмәртәләп һатҡан әйберҙең хаҡы һатып алыусыға килеп еткәнсе 25-50-100 процентҡа тиклем арта. Өҫтәмә хаҡтың күп өлөшө магазин хужаларының кеҫәләренә инеп ята. Мәҫәлән, Мәскәүҙә баҙар тотоп ҡына Төркиәнең эре курорт ҡалаларының береһендә бер нисә миллиард долларлыҡ ҡунаҡхана төҙөп ултыртҡан кешене беләм мин. Хәйер, уны мин генә түгел, бөтә Рәсәй белә. Тельман Исмаилов, баш ҡалабыҙҙағы Черкизово баҙарының хужаһы, бөгөн Төркиә гражданлығын алырға ғариза биргән, имеш. Һәм уны, көрсөк осоронда, Рәсәйҙән бер нисә миллиард долларҙы сит илгә сығарған, шулай итеп илебеҙ иктисадына оло зыян килтергән кешене береү ҙә тотторға, хөкөм итергә йыйынмай. Ә бит уйлап ҡараһаң, Исмаилов Шурмандан ҡайһы ере менән кәм? Улай ғына ла түгел, Төркиәлә ҡунаҡхана асыу тантанаһына Рәсәйҙең ҡайһы бер күренекле сәйәсмәндәре, хатта баш ҡаланың хужаһы барған, имеш. Йәғни, ер аҫтынан нефть сығарып һатҡан өсөн олигарх Ходорковский һәм уның компанияһын бөгөн хөкөм итәләр. Ә шул ер өҫтөндә баҙар ойоштороп байыған кешене - юҡмы? Ябай кешеләрҙең логикаһы ябай бит - күрәһең, Ходорковский ваҡытында кәрәкле кешеләргә аҡса "төртмәгән", ә Исмаилов - киреһенсә, тип аңлаттылар миңә был парадоксты таныштарым.

Һүҙ аҙағында тағы ла бер үҙенсәлекле хәл хаҡында әйтеп үтмәй булмай. Беләһегеҙҙер, көрсөк донъяның бер илен дә аяманы. Европала ла бар ул, Азияла ла. Беҙҙә лә. Шуныһы ҡыҙыҡ: һуңғы арала Европа илдәрендә хаҡтар төшә. Ә беҙҙә арта ғына. Нишләп, тип һорайһығыҙмы? Европалағы хәлдәр аңлашыла - ундағы халыҡтың аҡсаһы юҡ, улар магазиндарға йөрөмәй. Тәбиғи, магазин хужалары кешеләрҙе йәлеп итер өсөн хаҡтарҙы төшөрә. Күпкә түгел - дөйөм алғанда ни бары 0,4 процентҡа. Беҙҙә иһә хаҡтар 2009 йылдың ғинуарынан бөгөнгә көнгә тиклем 7,1 процентҡа артҡан. Нишләп улай, тиерһегеҙ? Беҙҙең эшҡыуарҙар көрсөк башланыу сәбәпле табыш күләме кәмеү менән бер нисек тә ризалаша алмай. Халыҡ барыбер ала ул, тип, хаҡтарҙы арттыра ла арттыра. Һөҙөмтәлә Рәсәй инфляция темптары буйынса Европала өсөнсө урында тора. Белоруссия һәм Украинанан саҡ ҡына ҡалышып.

Аҡса булған һайын етмәй, тиҙәр. Ысынмы икән? Бер тикшереп ҡарарға ине ошо әйтемде.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? КАЙҘА? КАСАН?

✔ БР Хөкүмәт Премьер-министры, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы ҡатнашлығында Санкт-Петербургта һабантуй гөрләп үтте. Делегация составына Башҡорт дәүләт һәм Сибай дәүләт филармониялары артистары, Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм Бүздәк районы ижади коллективтары инде. Шулай уҡ Һарытау өлкәһенең Перелюб районындағы алты башҡорт ауылы халҡы ла үткән ял көндәрендә һабантуй ойошторҙо.

✔ Сентябрҙә Башҡортостандың бизнес-делегацияһы Көньяҡ Африка Республикаһына барасаҡ. Сәфәр 10-18 сентябргә билдәләнгән. Башҡортостан Сауҙа-сәнәғәт палатаһының халыҡ-ара һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек идаралығы сәфәрҙе ойоштороу эштәре менән шөғөлләнә.

✔ Педагогия фәндәре кандидаты Ғәлиә Мөхәмәтйәнова менән философия фәндәре докторы Самат Мөхәмәтйәновтың педагогика нигеҙҙәренә арналған фәнни китабы Рәсәй ватан мәғарифын үҫтереү фонды тарафынан үткәрелгән конкурста лауреат булған. Был пособие тәрбиә менән профессиональ шөғөлләнеүселәр өсөн яҙылған.

✔ Хәйбулла, Баймаҡ, Йылайыр райондары августа үтәсәк республика мәғариф конференцияһына әҙерләнә. Әҙерлек сиктәрендә Хәйбуллала дүрт объект - Бүребай, Йәнтеш ауылдарында яңы мәктәп, Аҡъярҙа ике мәктәп сафҡа индереләсәк.

✔ БР Хөкүмәте эргәһендәге комиссия журналистар араһында үткәрелгән Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға документтар ҡабул итә башлауы тураһында хәбәр итә. Лауреаттарҙың материалдары 1 сентябргә тиклем ошо адрес буйынса ҡабул ителәсәк: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урам, 13-сө йорт, офис 1007, Журналистар союзы. Тел.: (347) 276-42-66.

✔ БР Президенты Указы менән Азамат Сәғитов, икенсе эшкә күсереләүе менән бәйле, БР Президенты Хакимиәте етәксеһе вазифаһынан бушатылды. БР Президенты Указы менән был вазифаға Николай Курапов тәғәйенләнде.

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

# УЙЫНДЫҢ...

## ҡомарлыһына тарыма

**Уйын бизнесы өлкәһенең криминал менән тығыҙ бәйле булыуы бер кемгә лә сер түгел. Ошо хәлде киҫәтеү маҡсатында 2007 йылдың 28 июнендә Башҡортостанда махсус закон ҡабул ителде. Уға нигеҙләнеп, эске эштәр органдары бик күп эштәр башҡарҙы.**

Был законға ярашлы, ҡомарлы уйындар ойоштороусы эшҡыуарҙар административ, хатта енәйәти язаға тарттырыла. Ошо өлкәлә законһыҙ рәүештә эшҡыуарлыҡ алып барыусылар биш йылға тиклем иркенән мәхрүм ителә ала. Административ яуаплылыҡҡа килгәндә, вазифалы кешеләргә штраф 40 мең һум күләмендә һалына, юридик шәхестәргә 500 мең һум ҡаралған. Законды ҡабаттан боҙған осраҡта был сумма вазифалы кешеләргә - 50 мең, юридик шәхестәр өсөн 1 млн. һумға тиклем етеүе ихтимал.

2009 йылдың тәүге ярты йылында уйын бизнесы алып барғандарҙы асыҡлау, уларҙың эшмәкәрлеген туҡтатыу маҡсатында бик күп рейдтар үткәрелде. Элек "һыңар ҡуллы бандиттарҙы" һәр бер ҡалала мөйөш һайын осратырға була ине. Закон ҡабул ителгәндән һуң, уларҙың күбеһе ябылды. Һәр хәлдә, бөгөн үҙәк урамдарҙа сағыулығы менән үҙенә йәлеп итеп торған клубтар юҡ.

Шул уҡ ваҡытта ҡомарлы уйындарҙан алынған табыштың ҙур икенән иҫәпкә алып, эштәрен аҫтыртын рәүештә дауам итеүселәр ҙә юҡ түгел. Күптәр интернет-салондар асып, глобаль селтәр ярҙамында эшмәкәрлеген дауам итә. Әммә был алым да киҫәтелә килә. Ҡулланыусылар баҙарындағы хоҡуҡ боҙоуҙар менән көрәш һәм административ ҡануниәтте башҡарыу бүлектәре хеҙмәткәрҙәре тәү сиратта интернет-салондарҙың эшмәкәрлек йүнәлештәрен асыҡлау менән шөғөлләнә. Шул уҡ ваҡытта глобаль селтәрҙәге уйын сайттарын да барлайҙар. Улар тураһында прокуратураға хәбәр итеп, урындағы провайдерҙарға ошо серверҙарға юлды ябыу мөмкинлеге бар.

Мәҫәлән, ҡулланыусылар баҙарындағы хоҡуҡ боҙоуҙар менән көрәш һәм административ ҡануниәтте башҡарыу үҙәге хеҙмәткәрҙәре быйыл Октябрьский ҡалаһында шундай салонды ябып, хужаһына ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатты. Дөйөм алғанда, 2009 йылдың тәүге ярты йылында ғына 469 законһыҙ ҡулланылыштағы уйын автоматтары, 152 берәмек компьютер техникаһы тартып алынды. Быйыл биш айҙа ғына 20 интернет һәм компьютер салоны ябылды.

Ҡомарлы уйындарҙан бик күптәр зыян күрҙе. Күпләп бурысҡа инеп, уны ҡаплау өсөн енәйәт юлына баҫыусылар бар. Күпме ғаиләләр тарҡалды. Мөлкәтен ошо уйынға һалыусылар ҙа бихисап. Шуға был мәсьәләгә барыһы ла етди ҡарарға тейеш. Әгәр ҙә ҡайҙалыр һаман да уйын бизнесы алып барып, халыҡты йәлеп итәләр икән, 128 номеры буйынса Эске эштәр министрлығының ышаныс телефонына шылтыратығыҙ, йә был турала урындағы прокуратураға хәбәр итегеҙ.

**Илнур ӘХМӘТЙӘНОВ.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ



**Йәйге каникулдар дауам итһә лә, республика мәктәптәрендә эш туҡтағаны юҡ. Сығарылыш уҡыусылары имтихандар тапшырып, юғары уҡыу йорттарына юл тотоу менән, мәктәптәрҙә киләһе йылға әҙерләү, уҡыусылар ҡабул итеү мәшәҡәттәре башланды. Бөгөнгө милли мәктәптәр ниндәй уңыш яулай, БДИның һөҙөмтәләре ҡыуандырырлыҡмы, сығарылыш уҡыусылары ниндәй вуздарҙы һайлаған, уҡытыусыларҙы нимә хәүефкә һала? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры Әлфир Сулпан улы ҒАЙСИН яуап эҙләй.**

# УҢЫШТАРҘАН...

## емеш тирәбеҙ

**Быйылғы уҡыу йылында 167 бала беҙҙең гимназия-интернатты тамамланы.** Әлбиттә, уларҙың барыһы ла юғары уҡыу йорттарына инергә ынтыла. Шуныһы ҡыуаныслы: уҡыусыларыбыҙ республикала ғына түгел, ә Рәсәй кимәлендә лә үҙҙәрен һынап ҡарарға теләй. Бигерәк тә уларҙы Н.Э. Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университеты, И.М. Губкин исемендәге Рәсәй нефть һәм газ университеты, Мәскәү дәүләт университеты, Мәскәү авиация институты, Санкт-Петербург дәүләт университеты һәм Санкт-Петербург дәүләт политехник университеты ҡыҙыҡһындыра. Күптәр Башҡортостанда юғары белем алырға теләй, йылдан-йыл Өфө дәүләт нефть техник университетына уҡырға инеүсе балалар һаны арта: бынан 4 йыл элек унда 12 бала уҡырға инһә, өс йыл элек - 23, былтыр 38 уҡыусы инде. Быйылғы уҡыу йылында был һан 50-гә етте. Элек-электән гимназия Өфө авиация техник университеты менән яҡшы бәйләнештә, быйыл унда 40-тан ашыу уҡыусы уҡырға инергә йыйына. Башҡорт дәүләт университетының физика, математика, химия, тарих, юридик факультеттарын һайлаусылар күп кенә. Гуманитар йүнәлешле синыфты тамамлаусылар башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын һайлай, гимназия-интернатты тамамлаған уҡыусылар бөгөн телевидениела, радиола, гәзит-журналдарҙа эшләй, күп кенә республика гәзиттәренең баш мөхәррирҙәре лә - беҙҙең уҡыусылар.

**Уҡыусылар Берҙәм дәүләт имтихандарын бик яҡшы тапшырҙы, тип һанайым.** Хатта ҡайһы бер фәндәр буйынса 100, 95, 90 балл йыйғандар булды. Ҡыҫҡаһы, БДИ-ны 167 баланың береһе лә насар бирмәне. Шуға ла уҡырға инеүселәр һаны быйыл, алдағы йылдар менән сағыштырғанда, тағы ла юғарыраҡ булыр, тип көтәбеҙ.

Сығарылыш имтихандары тамамланғас, гимназияға 8-се, 9-сы, 10-сы синыфтарға яңы уҡыусылар ҡабул иттек. Имтихан комиссияһы Күгәрсен һәм Мәсетле райондарына сығып та эшләне. Гимназия-интернатта үткән һынауҙарҙа 500-ҙән ашыу бала ҡатнашты. Әлегә тиклем гимназия-интернатта уртаса 620 бала уҡыһа, хәҙер был һанды 640-ҡа күтәрергә теләйбеҙ. Матур, рухлы, һәләтле, башҡорт телен белгән балалар уҡырға килде, улар ҙа беҙҙең гимназияны уңышлы тамамлап, төрлө уҡыу йорттары студенттары рәтен тулыландырыр, тип ышанам.

**Беҙ элек-электән Санкт-Петербург дәүләт университеты менән бәйләнештә торабыҙ.** Үҙ-ара төҙөлгән килешеү буйынса, был уҡыу йорто гимназия-интернат базаһында ҡабул итеү комиссияһы ойоштора. Комиссия составындағы дөртле, йәш ғалимдар йыл һайын Башҡортостанға, Өфө ҡалаһына, тәбиғәткә, кешеләргә һоҡланып ҡайтып китә. Тәүге йылдарҙа республикаға ҡараштары бөтөнләй икенсе ине. Беҙ уларҙы йыл һайын берәй район менән таныштырабыҙ, былтыр Дәүләкән районын, Асылыкүлде күрһәтһәк, быйыл Бөрйән районына алып барырға уйлайбыҙ. Стәрлетамаҡ районында, Нефтекама, Ағиҙел ҡалаларында булып, беҙҙең менән аралашып, республика һәм уның етәкселәре тураһындағы фекерҙәре хәҙер ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Башҡортостандағы мәктәптәр уларҙы бигерәк тә хайран ҡалдыра. Беҙҙең балалар Санкт-Петербург дәүләт университетында яҡшы билдәләргә генә уҡып йөрөй, был да улар алдында беҙҙең баһаны бермә-бер күтәрә.

**Төбәк компоненты - иң ауыртҡан урын.** "Башҡорт теле, әҙәбиәте, тарихы, географияһына сәғәттәр бүлеү икенсе фәндәрҙе үҙләштерергә ҡамасауламаймы? Был фәндәр урынына икенселәрен, мәҫәлән, математика, физика, химия дәрестәрен күбәйтеп, белемле математиктар, физиктар, химиктар тәрбиәләй алаһығыҙ бит", тигән һорауҙы Санкт-Петербург университетынан килгән хеҙмәттәштәрҙән дә йыш ишетәм. Минең шәхси фекерем буйынса, башҡорт теле, әҙәбиәте башҡа фәндәрҙе үҙләштерергә бер нисек тә ҡамасауламай, киреһенсә, ярҙам ғына итә. Кеше ике телдә лә уйлаһа һәм һөйләшһә, үҙенең халҡының бай тарихын, йәшәгән республикаһының географияһын белһә, тағы ла дәртләнеберәк уҡый, уға башҡа фәндәр еңелерәк бирелә. Быны дәлилләү өсөн йыраҡ китергә кәрәкмәй: беҙҙең балалар Бауман университетында уҡып йөрөй, унда улар арттан һөйрәлеүселәр рәтендә түгел, ә бөтә яҡтан да билдәле студенттар. Мәскәүҙә улар башҡорт телен һағынып йәшәй. Ярай әле беҙ 90-сы йылдар башында уҡ үҙебеҙҙең телебеҙҙең әһәмиәтен, уны һаҡлап ҡалырға кәрәклекте аңлап ҡалдыҡ. Тәүҙә башҡорт телен мәктәптәргә индереүе ҡыйын булды, күп ата-әсәләр балаһын башҡорт синыфына бирергә теләмәне, әммә беҙ был этапты уңышлы үттек. Бөгөн, башҡорт теле миңә нимәгә ул, тип фекерләгән бала ла, ата-әсә лә юҡ. Фәнни-техник дәүерҙә, технология революциялары осорonda йәшәйбеҙ, тип маҡтанырға яратабыҙ, ә шул уҡ ваҡытта рус теленә, әҙәбиәтенә иғтибар кәмеүен һиҙмәйбеҙ ҙә. Төбәк компонентын һаҡлап ҡалһаҡ, рус халҡы ла был йәһәттән отасаҡ бит.

Төбәк компоненты тураһында күп һөйләйбеҙ, халыҡ-ара судҡа мөрәжәғәт итергә тәҡдим итеүселәр ҙә юҡ түгел. Нисек инде мин, башҡорт кешеһе, әллә ҡайҙа Европаға судҡа барып, "Миңә башҡорт телен уҡырға рөхсәт итегеҙ", тип һорап йөрөйөм? Кешенең үҙ туған телен өйрәнергә теләүе - ул тәбиғи һәм нормаль күренеш, бында бер ниндәй ҙә суд кәрәк түгел. РФ Мәғариф министрлығы тыуҙырған был ситуация башҡа һыймай. Әллә ниндәй проблемалар булдырып, булған һәйбәт традицияларҙы юҡҡа сығарып, барыһын да яңынан төҙөй башларға ғәҙәтләнгәнбеҙ инде. Шуға ла милли мәғарифты үҫтереү буйынса егерме йылға яҡын эшләп килгән системаны юғалтмаҫҡа тырышырға кәрәк. Бөтә Рәсәй менән сағыштырып ҡараһаң, Башҡортостандағы милли мәғариф менән бер республика ла, автономлы өлкә лә, төбәк тә ярыша алмай.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә торлаҡ йорттарҙы капиталь ремонтлау тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Быйыл Өфөлә 246 торлаҡ йортто ремонтлау планлаштырылған булған.

✓Өфөлә Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение университеты абитуриенттар ҡабул итә башланы. Документтар "Иҡтисад һәм предприятиела идара", "Кино һәм телевидение продюсерлауы", "Йәмәғәтселек менән бәйләнештәр", "Дәүләт һәм муниципаль идара итеү", "Яҡтылыҡ техникаһы һәм яҡтылыҡ сығанаҡтары", "Приборҙар төҙөү", "Графика" һәм башҡа специальностар буйынса "Башҡортостан" дәүләт киностудияһы базаһында ҡабул ителә. 13-19 июлдә ошонда уҡ ҡабул итеү имтихандары үтә.

✓6 июлдә Өфөлә Башҡортостанда Вьетнам Социалистик Республикаһының мәҙәниәт көндәре башлана. Ошо сараға Вьетнамдан 30 артист киләсәк. Ҡала мәҙәниәт һарайында ҙур концерт үтәсәк.

✓Башҡортостанда беренселәрҙән булып Рәсәйҙең Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре тураһында таныҡлыҡ бирелә башланы. Республикала БДИ-ла 29990 кеше ҡатнашты. Шуларҙың 95980-нең һөҙөмтәләре үткән. Теләк буйынса имтихандарҙан "Йәмғиәтте өйрәнеү фәне" өҫтөнлөк итә - уның буйынса 10847 кеше имтихан биргән. Йомғаҡлау аттестацияһын 585 кеше үтә алмаған, тимәк, улар аттестат алмаясаҡ. 482 кеше мотлаҡ фәндәрҙең икеһен дә, 82 кеше - рус теленән, 21 кеше математиканан имтиханды ҡабатлап тапшыра алмаған.

✓Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙә ҡәҙимгә баҡсаларҙа үҫкән мәк орлоғонан наркотик матдәләр яһап ҡулланыу киң таралып бара. Был хәл Башҡортостанда ла күҙәтелә. Шундай хәлдәргә шаһит булһағыҙ, 98003472030 телефоны буйынса республиканың наркотиктар әйләнеше контроле хеҙмәтенә шылтыратығыҙ.

✓Быйыл юғары уҡыу йорттары 11 мендән ашыу бюджет урыны тәҡдим итә. Шул иҫәптән көндөҙгө бүлеккә 8048 кеше уҡырға инә аласаҡ, был былтырғы менән сағыштырғанда 577 кешегә күберәк.

ШУЛА-ААЙ ИКӘН...



**Башҡортостанда йәшәүсе 75 мең кеше дәүләт иҫәбенә пенсияларын арттырырға ҡарар итте. Улар бөтәһе лә Рәсәйҙә 2009 йылдың 1 ғинуарында старт алған хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөн дәүләт финанслауы программаһында ҡатнашыусылар.**

# МОХТАЖҺЫҘ ҠАРТЛЫҠ...

## әкиәт булмаясаҡ

РФ Пенсия фондының БР буйынса идараһы етәксеһе Фоат Хантимеров хәбәр итеүенсә, ғариза яҙыусыларҙың күпселеген 40 йәштән 60 йәшкә тиклемге эшләп йөрөүсе граждандар тәшкил итә, улар бөтәһе 60 проценттан ашыу. Шул уҡ ваҡытта мохтажһыҙ ҡартлығы хаҡында теләгән бер кеше хәстәрлек күрә ала: был программа 14 йәштән алып унан өлкәнерәктәргә (йәш яғынан сикләүһеҙ) иҫәпләнгән.

Граждандың үҙ теләге менән Пенсия фондына күсергән һәр бер һумы үҙенә икеләтә күләмдә ҡайтасаҡ - ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, программаның төп асылы бына шул. Взнос күләме йылына 2 меңдән дә аҙыраҡ булырға тейеш түгел, ә дәүләт йыл һайын 12 меңдән дә артыҡ булмаған күләмдә аҡса түләргә әҙер. Йәғни, әгәр һеҙ 2 мең түләйһегеҙ икән, дәүләт тә шунса уҡ күләмдә өҫтәп түләй. Пенсия йәшенә етһә лә эшләп йөрөгән һәм пенсия юллап мөрәжәғәт итмәгән кешеләр айырым шарттар менән файҙалана. Уларға дәүләт взносы үҙҙәренекенә ҡарағанда дүрт тапҡырға артыҡ була. Был төр категория граждандар өсөн пенсияларының тупланма өлөшөнә иҫәпләнеүсе йыллыҡ иң ҙур сумма 60 мең һум тәшкил итә.

Пенсия туплауҙы финанслау программаһында ҡатнашырға теләүселәр 2013 йылдың 1 октябренә тиклем ғариза яҙа ала. Программа 10 йылға иҫәпләнгән, ошо осорҙа дәүләт граждандарҙың Пенсия фондына күсергән аҡса күләмен финанслауҙа ҡатнашасаҡ.

Әйткәндәй, БР буйынса Пенсия фонды идараһы етәксеһе Фоат Хантимеровҡа гәзит уҡыусыларҙың ошондай анығ һорауҙарын төбәнек.

**- Пенсия алып та, шул уҡ ваҡытта эшләп тә йөрөүсе пенсионер әлеге программала ҡатнаша аламы?**

- Эйе. Федераль законға ярашлы, эшләп йөрөүе йәки пенсия алыуына ҡарамаҫтан, һәр бер граждан хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөнә өҫтәмә страховка взносы түләү маҡсатында үҙ теләге менән хоҡуҡ мөнәсәбәттәренә инә ала.

**- Программала ҡатнашыу өсөн ғаризаны ҡайҙа, кемгә яҙырға?**

- Ғаризаны граждан йәшәгән урыны буйынса эш биреүсеһе аша Пенсия фондының район (ҡала) идаралығына үҙе яҙып килтерергә бурыслы. Паспорт, мотлаҡ пенсия страховкаһы буйынса таныҡлығын үҙең менән алырға. Ғаризаны почта аша ла ебәрергә була, шул уҡ ваҡытта кешенең шәхесен, уның ҡултамғаһының дөрөҫлөгән билдәләү нотариус аша башҡарыла.

**- Взнос ҡайҙа һәм нисек түләнә? Банк, почта йәки эш биреүсе ашамы? Ай һайын түләргәме, әллә теләгән осор һайынмы?**

- Өҫтәмә страховка взносы кредит ойошмаһы аша башҡарыла, түләү осорҙарын билдәләүҙе граждан үҙе хәл итә. Кредит ойошмаларында түләү документтарын тултырыу өлгөләре бар. Бынан тыш, йәшәгән урыны буйынса Пенсия фонды органдарына мөрәжәғәт иткән осраҡта граждандаға датаһы һәм түләү суммаһы күрһәтелмәйенсә тултырылған әҙер квитанция бирелә. Эшләп йөрөүсе граждандар түләүҙе эш биреүсеһе аша башҡара ала, бының өсөн түләү күләме күрһәтелеп, ғариза яҙыла. Эш биреүсе был сумманы ай һайын хеҙмәт хаҡынан тотоп ҡала һәм Пенсия фондына күсерә.

**- Әгәр граждан программала ҡатнашыу өсөн ғаризаны, мәҫәлән, ошо йылдың майында яҙған булһа, ә пенсияға 2011 йылдың майы сығырға тейеш икән, уға ҡасан "юғары" суммала пенсия түләнә башлаясаҡ?**

- Хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшө граждандаға Пенсия фонды органына яҙған ғаризаһы буйынса пенсия йәше тулғас билдәләнә. Пенсияның тупланма өлөшө күләме тупланған дөйөм сумманы һәм пенсия түләнә башлау осорон иҫәпкә алып хисаплана.

**Әлфиә ШӘРӘФЕТДИНОВА. "БАШИНФОРМ".**

ҮӘТ ӘЙ!

# ПЕНСИЯ ХОҠУҠТАРЫ...

## ҡайтанан ҡаралмаҡсы

**Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте өлкән быуын рәсәйлеләрҙең пенсия хоҡуҡтарын ҡайтанан ҡарау тураһында ныҡлы ҡарарға килде. Әлеге ваҡытта граждандар тарафынан 2002 йылғы пенсия реформаһына тиклем алынған пенсия хоҡуҡтарын ҡайтанан баһалау, йәғни "валоризациялау" буйынса закон проекты әҙерләнә.**

- Был пенсия тәьминәтендә иң ғәҙел система буласаҡ, - тип иҫәпләй Рәсәй Пенсия фонды идараһы рәйесенең беренсе урынбаҫары Александр Куртин. Шул уҡ ваҡытта уның "реформа" тигән һүҙҙән аңлы рәүештә ҡасыуы һиҙелә.

- Был яңы пенсия реформаһы түгел, сөнки төп реформа 2002 йылда үткәрелде. Был пенсия тәьминәте системаһын камиллаштырыу ғына, - ти ул.

Куртин "пенсия хоҡуғы"ның 2002 йылдың 1 ғинуарына ҡарата иҫәпләнгән капитал булыуын һәм хеҙмәт пенсияһының страховка өлөшө шунан сығып билдәләнеүен иҫкә төшөрҙө.

Хөкүмәт планы буйынса, 2002 йылға тиклемге осорҙа эш стажы булған пенсионерҙарға 10 процент өҫтәмә ҡарала.

- Шул уҡ ваҡытта кешенең ҡасан - 1995 йылмы әллә 2005 йылдамы пенсияға сығыу ваҡыты әһәмиәткә эйә түгел, - ти Куртин. - Өҫтәүенә, 1991 йылға тиклемге совет осорондағы хеҙмәт стажының һәр йылы өсөн 2002 йылдың 1 ғинуарына ҡарата иҫәпләнгән пенсия капиталынан бөрәр процент өҫтәмә ҡарала. Валоризациялауҙы һорап, бер кемдең дә ғариза яҙыуы кәрәкмәй.

Шундай бер миҫал килтерәйек. 34 йыл эш стажы булған пенсионер 33 йылын совет осоронда эшләгән, ти. 1992 йыл Рәсәйҙә пенсияға сығып, башҡаса эшләмәһә, 2010 йылдың 1 ғинуарынан ул 2002 йылға тиклемге стажы өсөн - 10 процент һәм совет осоронда эшләгән хеҙмәт стажы өсөн 33 процент өҫтәмә аласаҡ. Һөҙөмтәлә уның пенсия хоҡуҡтары 43 процентҡа һәм шуға ярашлы пенсияның страховка өлөшө шулай уҡ 43 процентҡа артасаҡ.

Тағы бер миҫал.

1962 йылғы ҡатын 2007 йылдан ҡартлыҡ буйынса ваҡытынан алда тәғәйенләнгән хеҙмәт пенсияһы ала. 25 йыл эш стажының 10 йылын - 1991 йылға тиклем, тағы 10 йылын - 1991 йылдан 2002 йылға тиклем һәм 5 йылын яңы пенсия системаһы шарттарында эшләгән. Уның пенсия хоҡуҡтары ла валоризациялауға эләгәсәк, һәм уның коэффициенты 20 процент тәшкил итһә, шуның 10 проценты 1991 йылға тиклем эшләгән стаж өсөн буласаҡ.

Былар бөтәһе лә, әлбиттә, 2010 йылға планлаштырыла. Ә ағымдағы йылда пенсионерҙарҙы нимә көтә һуң? Рәсәй Пенсия фонды мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2009 йылда хеҙмәт пенсияһы күләме элек әйтелгәнсә өс түгел, ә дүрт тапҡыр өҫтәләсәк, тип көтөлә. Уның тәүгеһе 1 мартта булып үтте. Хеҙмәт пенсияһының нигеҙ өлөшө һәм социаль пенсиялар 8,7 процентҡа индексацияланды. Хеҙмәт пенсияһының нигеҙ өлөшө хәҙер 1950 һум тәшкил итә. Икенсе тапҡырға индексациялау 2009 йылдың 1 декабренә көтөлә, уның һөҙөмтәһендә пенсияның был өлөшө, элек әйтелгәнсә, 26,5 түгел, ә 31,4 процентҡа артасаҡ.

Хеҙмәт пенсияһының страховка өлөшө 1 апрелдә индексацияланды. Рәсәй хөкүмәте тарафынан тәүҙә ҡаралған 15,2 урынына пенсияның страховка өлөшө 17,5 процентҡа арттырылды. Закон буйынса, әгәр тәүге ярты йыллыҡта аҡсаның осһоҙланыу кимәле 6 проценттан артһа, өҫтәмә индексациялау ҡарала. Пенсияның страховка өлөшөн икенсегә индексациялау ошо йылдың 1 августына 7,5 процент кимәлендә планлаштырыла.

Шулай итеп, социаль пенсиялар һәм хеҙмәт пенсияһының дәүләт тарафынан гарантияланған нигеҙ өлөшө тотош ошо йыл эсендә 42,8 процентҡа артасаҡ. Был илдә күҙаллағған хаҡ артыу күләменән 25,3 процентҡа юғарыраҡ. Хеҙмәт пенсияларының уртаса күләме 2009 йылда, шулай итеп, 23,9 процентҡа, йәғни күҙаллаған хаҡ артыу кимәленән 8,7 процентҡа юғары.

Хөкүмәттең ошондай саралаҙы ғәмәлгә ашырыуы һөҙөмтәһендә 2009 йылдың декабрендә социаль пенсияның уртаса күләме пенсионерҙың йәшәү минимумы менән тигеҙләнәсәк. Ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме иһә пенсионерҙың йәшәү минимумынан 33 процентҡа юғарыраҡ булыуы күҙаллана.

**Елена МАКУШЕВА. "БАШИНФОРМ".**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Башыңды "ват", мейеңде "бейет", сәсеңде "һуғар"

**Һәр беребеҙ көн һайын матур кейенеп, биҙәнептөҙәнеп эшкә, башҡа урынға барырға онотмай, әммә берәү ҙә мейе тураһында уйламай, хәтерһеҙлектән зарланалар ғына. Хәтер ныҡлығы өсөн түбәндәгеләрҙе эшләргә кәрәк:**

1) доғалар, шиғырҙар ятла, үҙең дә ижад ит;

2) бер нисә сит тел һүҙен тәржемә итеп "яфалан" - башыңды "ват";

3) тарағың көн һайын сәсең төбөнә 300-400 мәртәбә "йүгереп төшһөн", сәсеңә бабайҙар ҡулын майлап, 5-10 тапҡыр башың һыйпаһын;

4) түбәнә генә тауыҡтың эс майын йәки һары май һал - мейең дә, баш тамыры ла туҡланыр, сәсең дә ҡойолмаҫ;

5) арпаны һап-һары булғансы йыу, ҡайнаған һыу ҡой, һикертеп ҡайнатып ал, һөҙ һәм башыңды йыу - сәсеңдең "һыуһыны ҡаныр", мейең туҡланыр.

## Йүткергәндә ни эшләргә?

Эҫе йәй етте, бала-саға көндәр буйы һыуҙан сыҡмай. Оҙаҡ йөҙә торғас, күгәрешеп тә бөтәләр, ҡайһылары йүткерә лә башлай. Был осраҡта былай итергә: 1) бер стакан ҡайнаған һөткә бер балғалаҡ бал ҡушып эсерергә; 2) йомортҡа һарыһына шәкәр ҡушып, ағарғансы туҡырға һәм ас ҡарынға эсергә; 3) ярты стакан һөткә ярты стакан кишер һуты ҡушып эсһәң дә шифаһы тейә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА. Әбйәлил районы Байым ауылы.**

## Ҡомға ятыу

Йәйге селләлә һыу буйына сығып, өҫтөндәге ҡомдо ситкә алып тороп, ерҙе ярты метр самаһы тәрәнлектә кеше кәүҙәһе һыйырлыҡ итеп ҡаҙырға. Соҡор эсенә ут яғырға ла, ул янып бөткәс ҡом түшәп, аяҡ-ҡул быуындары һыҙлаған кешене соҡорға ятҡырырға һәм муйынына тиклем ҡояшта ҡыҙған эҫе ҡом менән күмеп ҡуйырға. Башын ҡояштан ҡапларға, сәйнүктән йыйы үлән сәйе эсереп торорға. Ҡарауһыҙ ҡалдырырға ярамай. Бер-ике сәғәт, йә кешенең хәленә ҡарап күберәк ятҡырырға була. Аҙаҡ ҡомға ятҡан кеше тороп ҡояшта йылынған һыуға сайҡанып, ҡоро кейемдәрен кейеп ҡайтып китә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *Шунан төрмә начальнигы, былар ғәҙәти кешеләр түгел, тип, сәйгә саҡырып, сәй эсереп ебәрә торған булған. Аҙаҡ һеҙ изге кешеләр, халҡығыҙҙы ҡарағыҙ, тип, ҡайтарып ебәргәндәр.*



*БАЛАҢА УҠЫ!*

# ҠЫЙЫУ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫБЫҘ



**Башҡорт халыҡ ижадында батыр йөрәкле, тапҡыр һүҙле, сая, шул уҡ ваҡытта шиғри күңелле, моңға мөлдөрәмә тулы булмышлы ҡыҙҙарыбыҙ тураһында йыш ҡына телгә алына. Әммә беҙ исемдәре бөгөнгәсә һаҡланып, реаль шәхес булыуын иҫбат итерлектәре тураһында ғына бәйән итәбеҙ.**

### Бәндәбикә

Күгәрсен районының Мәксүт ауылы эргәһендә "Бәндәбикә ҡәбере" тип йөрөтөлгән кәшәнә бар. Унда үҙ заманында аҡылы, әүлиәлеге, тапҡыр һүҙле булыуы менән дан ҡазанған Бәндәбикә исемле башҡорт ҡатыны ерләнгән. Ғалимдар, кәшәнә төҙөлгән кирбестәрҙе тикшереп ҡарап, ике төрлө ҡалып менән һуғылған еңел генә, ныҡ, аҡһыл-күк төҫтә булыуынан сығып фараз итеп, кирбестәрҙең Ҡаҙағстан, Үзбәкстан яҡтарынан килтерелеүе лә ихтимал, тиҙәр. Бәндәбикәгә дауаланырға килгән саҡта алып киленгәнме ул, ерләнгәндән һуңмы - билдәһеҙ. Әммә был ҡатындың даны бар тирә-яҡҡа таралған һәм "уға дауаланырға ер аяғы-ер башынан да килгәндәр" тигәндәре раҫ булып сыға. Тимәк, башҡорт ҡатыны Бәндәбикәнең данлы исеме бик алыҫтағы илдәргә лә билдәле булған.

Исеме киң таралған сәсән телле Ерәнсә сәсән Бәндәбикәнең һылыулығына, тапҡыр һүҙле булыуына хайран ҡалған һәм байтаҡҡа олораҡ булһа ла уға өйләнгән.

### Ғилмияза

"Ғилмияза" тигән иҫ китмәле йыр бар башҡорт халҡында. Ишеткәнегеҙ барҙыр. Бығаса ишетмәгән булһағыҙ, тыңлағыҙ. Хатта сит ил музыка белгестәре лә көйҙөң камиллығына, тәҙәклегенә һоҡланыуын, ғәжәпкә ҡалыуын йәшермәй. Уның ябай көй генә түгел, ә тамамланған бөтөн бер музыкаль әҫәр булыуы хаҡында фекер әйтәләр.

Был йырҙың ижад ителеү тарихы хаҡында төрлө легендалар бар. Ниндәй генә легенда һөйләмәһендәр, беҙҙең өсөн иң мөһиме - ысынлап та, Ғилмияза исемле башҡорт ҡыҙы йәшәгәнлеге һәм был ҡыҙҙың үҙ һағышын быуаттарҙан-быуаттарға етер йыр итеп ҡалдырыуы раҫ. Йөрәгендә ни тиклем моң, ни тиклем музыкаллек, ни тиклем аһәң йөрөтөүсе шиғри күңелле ҡыҙҙарыбыҙ булған. Ә йыр һүҙҙәрендә ни тиклем образлылыҡ ята. Тыуған илен һағыныуын, яратыуын, зар-интизар булыуын ҡалай көслө, йән тетрәткес һүҙҙәр менән әйтә ул Ғилмияза исемле һылыу.

Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп.

"Ашҡаҙар" йырын сығарған Таңһылыу ҙа, "Таштуғай"ҙың авторы Көнһылыу ҙа һәр бөгөләшө, һәр һуҙымы, моңо менән йән тетрәндергес кенә түгел, теүәллеге менән музыка белгестәрен һоҡландырырлыҡ, ә йыр һүҙҙәрендә ябай, әммә тәрән образлылыҡ менән шағирҙарҙы көнләштерерлек ижад ҡалдырған.

### Таңдыса

"Ҡуңыр буға" эпосының бер вариантында ҡулдарын "һелтәй-һелтәй" һыйырҙарын эҙләп, йыр сығара-сығара барған башҡорт ҡатынының исеме Таңдыса тип алынған. Тағы ла ҡабатлап әйтергә кәрәк, уның исеме кем генә булмаһын - ул ҡурҡмаҫ йөрәкле, бөтөнләй таныш булмаған һуҡмаҡтарҙан бара, төндәрен тәбиғәт ҡосағында ятып йоҡлай, зирәк-мал эҙенән төрлө билдәләр буйынса яңылышмай килә, зиһенле - тәбиғәттәге билдәләр буйынса ла, йондоҙҙарға ҡарап та йүнәлеште асыҡлай, отҡор - һәр төрлө шифалы үҫемлектәр менән дауалау тураһында атаһы, Таһранда уҡып ҡайтҡан ағаһы һөйләгәндәрен отоп алған, хәтерендә һаҡлаған башҡорт ҡатыны булған һәм быуаттарҙан-быуаттарға саҡлы онотолмай һаҡланырлыҡ йыр ижад иткән.

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*

**Әлхәмдүлилләһи, ҡәһәрле дәһрилек йылдары әкренләп артта ҡала. Халҡыбыҙҙы иманға ҡайтарыуҙа, уның был донъяла йәшәүенең асылын аңлатыуҙа ҙур уңыштарға өлгәшкән кешеләрҙең, күренекле дин әһелдәренең пак исемдәре халҡыбыҙға кире ҡайтарыла. Шуларҙың береһе - Зәйнулла ишан Рәсүлев. Хәҙер аңлы кешеләр араһында был әүлиәнең ҡылған изге ғәмәлдәре, кираматтары, тормош юлы тураһында белмәгәндәр һирәктер.**

# ҒАТАУЛЛА ИШАН -

## Зәйнулла Рәсүлевтың фекерҙәше, көрәштәше

Әбына Зәйнулла Рәсүлевтың фекерҙәше, көрәштәше, һабаҡ алыу, хаж ҡылыу һәм һөргән михнәттәрен бергә кисергән дуҫы Ғатаулла ишан Әбделмәликов (Ғатаулла Әбделмәлик улы Әлибаев, революцияға тиклем башҡорттарҙа атаһының исеме фамилия булып йөрөгән) тураһында әлегә, ҡызғанысҡа ҡаршы, аҙ беләбеҙ. Яҙыусы Рәшит Шәкүрҙең 1995 йылдың 8 сентябрендә "Башҡортостан" гәзитендә ташҡа баҫылған "Илебеҙҙең изге заттары" тип аталған мәҡәләһенән тыш, уның тураһында яҙғандары юҡ, тиер инем, журналист Рәүеф Насиров үҙенең китабында уның хаҡында шулай тип телгә алып үтә: "Зәйнулланың илдәр гиҙеүе һәм аҡыл туплау мәсьәләһенә туҡтап, шуны әйтергә кәрәк. Уның алыҫ сәфәрҙә Ғатаулла Әлибаев атлы тоғро юлдашы, яҡын дуҫы булыуы мәғлүм. Хәйбулла районының Мәмбәт ауылы кешеһе Зиннур Әхмәтов, мәҫәлән, Зәйнулла Ғатаулла менән Истанбулда, Бағдад, Мысыр, Мәккә, Мәҙинәлә бергә булған, ти. Уҡыйҙар, хаж ҡылып ҡайталар. Ҡайтҡас, халыҡҡа төрлө мөғжизәләр күрһәтәләр. Моғайын, был хикмәттәр им-том, гипноз һәүә ҡағылалыр. Ә инде был ике руханизың һуңынан Вологда, Кострома һөргөнөндә лә бергә михнәт кисереүҙәрен иҫтә тотһаҡ, уларҙың тормошон өйрәнеү ҙә бер-береһенән айырылмаҫҡа тейештер".

Кем һуң ул данлы Зәйнулла ишан менән тиң ҡуйылырҙай, уның кеүек үк ишан дәрәжәһен йөрөткән Ғатаулла Әбделмәликов? Был турала Рәшит Шәкүрҙең мәҡәләһендә ярайһы ғына аңлатыла. Ул былай тип яҙа: "Ғатаулла ишан тураһында тәү башлап 1987 йылдың 14 июлендә Белорет районының Абҙаҡ ауылында Сәлих Иҫәнбаев ағайҙан ишеткән инем (Сәлих ағай мәшһүр ҡурайсыбыҙ Йомабай Иҫәнбаевтың улы, Хәйбулла районы, Түңгәүер ырыуы башҡорто). "Хәйбулла районы Вәлит ауылы зыяратында Ғатаулла ишандың ҡәбере бар, - тип, йәнә уның китаптары тураһында мауыҡтырғыс хәбәр һөйләгәйне ул саҡта Сәлих ағай. - Ҡәбер эргәһенә, имән таҡталар менән көпләп, өҫтөн ябып, китаптарын ҡуйғандар. 1958 йылда асып ҡараныҡ. Баҫма китаптары шул көйөнсә һаҡланғайны. Әлеге таҡта ҡумтаның буйы - 2, киңлеге 1 метр. Ғатаулла ишан рухына хәйер итеп таҡта өҫтөнә тәңкә аҡсалар һалып китәләр".

"Иң мөһиме: "Ғатаулла ишан менән Зәйнулла ишан - бер ҡор кешеләре, - тип һүҙен дауам итте Сәлих Иҫәнбаев һәм ошондай хикмәтле риүәйәт тә һөйләне. - Бер ваҡыт Зәйнулла ишан менән Ғатаулла ишан өҫтөнән батшаға, улар сихырсы, тип, ялыу бара. Батша саҡыртып ала ла әйтә:

- Мына ҡырағай йәнлектәр араһына керетегеҙ. Әгәр улар изге кешеләр булһа, йәнлектәр теймәҫ, ә сихырсылар икән, иҫән ҡалмаҫтар, ти. Керетәләр арыҫландар араһына. Йәнлектәр былар араһында ҡойроҡтарын болғап йөрөйҙәр, ти..."

Артабан Рәшит Шәкүр Ғатаулла ишандың әле Вәлиттә йәшәп яткан ейәне Зәйнулла Әлибаевҡа барып юлығыуы тураһында һәм ҡартатаһы хаҡында уның һөйләгәндәрен бәйән итә: "Ҡарт етем үҫкән. Зәйнулла ишан менән һөргөндә бергә йөрөгән, - тип һөйләне Зәйнулла ағай. - Гипнозға һәләтле булған. Кешеләрҙе ҡыйыҡ башынан һелрәдтен йөрөткән. Үҙҙәре ҡоламай ҙа икән. Сихырсы, фәлән дә төгән, тип, өлкәндәр, бергә уҡыған кешеләре һөргөнгә ебәрткән. Шул Троицкиға барып ҡайтып йөрөгән ул һуңынан. Зәйнулла ишан менән бергә ебәргәндәр. Ул инде байыраҡ булған, был ярлыраҡ. Ҡайҙа ултырған губернаһын да белә инем әле - Кострома губернаһы. Йоҙаҡ үҙенән-үҙе асылып, сығып йөрөгәндәр. Шунан төрмә начальнигы, былар ғәҙәти кешеләр түгел, тип, сәйгә саҡырып, сәй эсереп ебәрә торған булған. Аҙаҡ һеҙ изге кешеләр, халҡығыҙҙы ҡарағыҙ, тип, ҡайтарып ебәргәндәр.

Быны ошо беҙ йәшәгән ерҙә уның өйөнөң нигеҙе. Мал өйө, китап өйө, үҙенең торған өйө, кешеләрҙе ҡабул итеү өйө булған. Ике әбейе менән бергә йәшәгән. Килгән кешеләрҙе ҡараған. Мәғлүмәте ҙур булған, үҙебеҙҙең мәҙрәсәләрҙән һуң өс йыл Төркиәлә уҡып ҡайтҡан.

Йөрөп яткан, Орскиға ла барған (ҡоҙалары шунда булған). Троицкиға ла. Орск бынан 120 километр, Троицк йыраҡыраҡ.

Күсер булып йөрөгән Мортаза Вәлитов ағай бар ине, 1895 йылғы. Бер ваҡыт көймәле сана менән китеп баралар икән. Ҡарт (Ғатаулла ишан), кейеҙ ябынып, көймәлә ята, ти. Аҙашып китһән, балам, һин уңғараҡ борол, йә, һулғараҡ борол, тип әйтеп ята, ти. Бында урыҫтар ҙа уны бик яратҡан. Башҡортон да, урыҫын да дауалаған".

Хәҙер тағы Рәүеф Насировҡа мөрәжәғәт итәйек. "1872 йылда Зәйнулла ишанды Өфөгә - дини йыйылышҡа (Диниә назаратына - **С.Я.**) саҡырталар. Сәлимгәрәй мөфтөй янында тәфтишләү яһайҙар. Төрлө һорауҙар бирелә. Зәйнулла ишандың яуаптары инандырырлыҡ була, ул белеменең төплө икәнлеген күрһәтә, дингә ҡарата моафиҡ булыуын иҫбатлай. Быны мөфтөйҙең яҡындарынан беренсе булып аңлаған Ғисмәт Шаһигәрәй (Шишмә төбәгенән), мөфтөйҙең дәғүәһен бисәләр ғәйбәтенә оҡшатып, йыйылышты ташлап сығып китә. Мөфтөй ҙә был кешенең боҙоҡ әҙәм булмауын аңлап, иғлан итә: бар, йортоңа ҡайт, эшеңде дауам ит.

Ләкин уның дошмандары, уйниәттәренең юҡҡа сыҡҡанын күргәс, губернатор исеменә ләшикәйәт ебәрә. Йәнәһе, "Зәйнулла бик хәүефле кеше, ул төрөк тарафтарына аҡса йыя, ғәскәр туплай". Ишан Златоусҡа барып етеүгә, уны Өфө губернаторының әмере ҡыуып етә. Ишанды ҡулға алып, Златоуст төрмәһенә ултыртып ҡуялар.

Ишанды рәсми ғәйепләү өсөн ярты йыл самаһы ваҡыт үтеп китә. Ниһәйәт, уны (Зәйнулла ишанды - **С.Я.**), мосолман халыҡтары араһында хөкүмәт ҡараштарына тап килмәгән ҡотҡо таратыуҙа ғәйепләп, Вологда губернаһына һөргөнгә ебәрәләр.

***Ғатаулла ишандың исеме, һис шикһеҙ, Зәйнулла ишандыҡы менән йәнәш ҡуйылыуға лайыҡ. Сөнки буласаҡ шәйехтәр хажға барып, Истанбулда бергә уҡып, ишанлыҡ алып ҡайтҡас, береһе Верхнеуральск өйәҙендә, икенсеһе Орск өйәҙендә йәшәгән башҡорттар араһында яңы дини тәғлимәт, йәғни Наҡшбәндиә суфыйҙар орденының Хәлидиә тармағы тәғлимәтен (тәриҡәтен) тарата, мөриттәр тәрбиәләү менән әүҙем шөғөлләнә, мәҙрәсәләрҙә донъяуи фәндәрҙе лә уҡытыуҙы алға һөрә, икеһе лә әүлиә була, икеһе лә кешеләрҙе дауалай, икеһе лә киләсәк ваҡиғаларҙы алдан әйтеп бирергә һәләтле була. Шунлыҡтан, ялыуҙы ла бит икеһе өҫтөнән дә яҙалар.***

***✓ Бик мәшһүр заттан булып сыҡты Ғатаулла ишан. Уның хәҙерге Баймаҡ районындағы боронғо Түңгәүер ауылы Ҡыуатҡа нигеҙ һалыусы бабаһы Ҡыуат Хәсәнов 1773-1775 йылдарҙағы ихтилалда ҡатнаша. Ул - Пугачев полковнигы.***



...Вологда губернаторы уны бер мосолман кешеһе лә булмаған Никольск ҡалаһына урынлаштыра. Бында хәҙрәт полиция күҙәтеүе аҫтында өс йыл тора. 1876 йылда, үҙенең үтенесе буйынса, ишан Кострома ҡалаһына күсерелә. Бында, аҙ ғына булһа ла мосолмандар йәшәгәнлектән, ишан үҙен ватанында кеүек тоя. Ете йылдан артыҡ ваҡыт үткәрә ул Костромала".

Күренеүенсә, Рәүеф Насиров Зәйнулла ишандың Златоуст төрмәһендә лә, һөргөндә лә яңғыҙ булыуы тураһында һүҙ алып бара. Әммә ул яңылыша, сөнки Рәшит Шәкүр, Зәйнулла Әлибаевтың әйткәндәренә таянып, Зәйнулла ишандың яңғыҙ түгел, Төркиәлә бергә уҡып, бергә ишанлыҡ алған дуҫы Ғатаулла ишан менән һәр саҡ бергә булыуын иҫбатлай һәм һүҙҙәрен документтар менән нығыта.

"Ниһайәт, рәсми сығанаҡтарға мөрәжәғәт итергә ваҡыт етте. 1993 йылда Өфөлә "М. Өмөтбаевтың Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгендә һаҡланған фондына ҡыҫҡаса тасуирлама" баҫылып сыҡты, - тип яҙа Рәшит Шәкүр. - Китаптың 56-сы битендә "Ырымбур генерал-губернаторының мөнәсәбәте" тигән ике документтың күсермәһе телгә алына. Береһе 1872 йылдың 25 сентябрендә яҙылған һәм генерал-адъютант Н.А. Крыжановский тарафынан ҡул ҡуйылған. Икенсе "Мөнәсәбәт ..." шул уҡ йылдың 21 декабрендә яҙылған. Икеһендә лә Верхнеуральск өйәҙе Аҡкужа ауылының указлы муллаһы Зәйнулла Хәбибуллинды (йәғни Зәйнулла Хәбибулла улы Рәсүлев) һәм Орск өйәҙе Вәлит ауылының башҡорто Ғатаулла Әбделмәликовты ошо өйәҙҙең башҡорттары араһында яңы дини тәғлимәт таратҡандары өсөн полиция күҙәтеүе аҫтында Ырымбур губернаһынан һөрөп ебәреү хаҡында үтенес белдерелә. Икенсе документта иһә ҡайҙа һөрөлөүҙәре хаҡында ла - Вологда губернаһына, тип, ап-асыҡ әйтелә. Тәүге "Мөнәсәбәт"тә, әлеге ваҡытта был кешеләр Златоуст төрмәһендә ултыра, тигән һүҙҙәр ҙә бар. Ниһайәт, З. Рәсүлев менән Ғ. Әбделмәликов Вологда губернаһына һөргөнгә оҙатыла. 1875 йылда уларҙы Кострома губернаһына күсерәләр һәм 1880 йылда ғына Полиция департаменты тотҡондарҙы ирекҡә сығара".

Ырымбурҙағы "Ваҡыт" матбағаһында (типографияһында) 1917 йылда Зәйнулла ишандың бер туған ағаһының улы Муса Рәсүлевтың "Зәйнулла ишандың тәржемәи хәле" тигән китабы донъя күрә (Ул китаптың бер данаһы Учалы ҡалаһында йәшәүсе Сәғитйән ағай Ибраһимовта һаҡлана, Аллаһ рәхмәтендә булһын). Унда ошондай юлдар бар:

**"Духовный Собрание (**хәҙерге Үҙәк Диниә назараты - **С.Я.) тарафынан саҡырып хәбәр килгәнлектән 1872 йылда йәй көнө шәйех Зәйнулла хәҙрәттәре Өфөгә барырға әҙерләнгән ваҡытта Орск өйәҙенән Ғатаулла хажи һәм шәйех хәҙрәттәре уның хозурына килде. Шәйех Ғатаулла Хәлидиә тәрикенә мөрит тәрбиә иткәнлек сәбәпле, дошмандары уның өҫтөнән Собраниеға донос иткәндәр. Ул да шәйех Зәйнулла рәүешендә йыйналып, яуап үә тәфтиш өсөн Собраниеға саҡырылған икән. Зәйнулла хәҙрәттәре менән Ғатаулла хажи Өфөгә бергәләп сәфәр иттеләр. Комиссия ағзалары һәм улар Өфөлә Собрание хозурына йыйылып, сөъалдар (**һораүҙар - **С.Я.), яуаптар алынып, мөфтөй шәйех Зәйнулла менән Ғатаулла хажиҙарҙы, подпистар алып, өйҙәренә ҡайтырға рөхсәт бирмеш. Былар ҡайтып барған ваҡыттарында Өфө губернаторы тарафынан килгән телеграммаға күрә Златоуст исправнигы Дәүләтшин быларҙы тотторҙо үә Златоуст ҡалаһында зинданға хәбес иттерҙе (**төрмәгә яптырҙы - **С.Я.). Былар Златоуст зинданында һигеҙ ай яттылар. Шунан һуң министрҙың Вологда губернаторына барыу тураһында хөкөмө иғлан ҡылынды".**

Тимәк, Ғатаулла ишандың исеме, һис шикһеҙ, Зәйнулла ишандыҡы менән йәнәш ҡуйылыуға лайыҡ. Сөнки буласаҡ шәйехтәр хажға барып, Истанбулда бергә уҡып, ишанлыҡ алып ҡайтҡас, береһе Верхнеуральск өйәҙендә, икенсеһе Орск өйәҙендә йәшәгән башҡорттар араһында яңы дини тәғлимәт, йәғни Наҡшбәндиә суфыйҙар орденының Хәлидиә тармағы тәғлимәтен (тәрикәтен) тарата, мөриттәр тәрбиәләү менән әүҙем шөғөлләнә, мәҙрәсәләрҙә донъяуи фәндәрҙе лә уҡытыуҙы алға һөрә, икеһе лә әүлиә була, икеһе лә кешеләрҙе дауалай, икеһе лә киләсәк ваҡиғаларҙы алдан әйтеп бирергә һәләтле була. Шунлыҡтан, ялыуҙы ла бит икеһе өҫтөнән дә яҙалар.

Миңә лә Ғатаулла ишандың ҡәберенә зыярат ҡылырға насип булды, иншалла! Ишан ейәне Зәйнулла олатай менән уның тормош иптәше Фәрзиә инәй беҙҙе бик ихлас ҡаршы алдылар, оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырҙыҡ.

"Ҡартатайым (йәғни Ғатаулла ишан - **С.Я.**) Зәйнулла ишан менән ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем ҡатнашып йәшәгән, - тине ул. - Өшкөрөп, кешеләрҙе күп дауалаған, хатта әллә ҡайҙарҙан ҡаҙаҡтар ҙа дөйәләр менән уға килгәндәр. Урыҫтарын да ҡараған. Бөгөнгә көндә лә ҡаҙаҡтар уның ҡәберенә килеп, хөйергә тәңкәләр һалып китә, намаҙ уҡыйҙар".

Ғатаулла ишан 1914 йылда донъя ҡуя һәм үлер алдынан: "Донъяға ут ҡапты. Уландар, хушығыҙ!" - ти. Билдәле булыуынса, тап шул йылда башҡорттарҙа ярман һуғышы тип аталған һәм ярты донъяны ялмап алған империалистик һуғыш башлана. Ҡәбере боронғо башҡорт йолаһы буйынса, киң итеп, бил бейеклегендә таш менән буралған, йәғни таш диуар менән уратып алынған. Баш осона дүрт ҡырлы аҡ ҡолпо таш ҡуйылған. Белгестәр уның гранит икәнлеген билдәләне. Был ташты ҡайҙандыр бер йылҡыға алмаштырып алғандар икән. Эргәһендә дәү ҡарағас үҫеп ултыра. Уны Ғатаулла ишандың хәҙерге Йылайыр районының урман араһында ятҡан Мәксүт ауылына кейәүгә сыҡҡан Зөбәйҙә исемле ҡыҙы алып килеп ултыртҡан, тинеләр. Ишандың эргәһендә ике ҡатыны менән Абдулла исемле улы ла ята икән.

Өфөгә ҡайтҡас, мәшһүр Түңгәүер ҡәбиләһе Ялан-Түңгәүер ырыуы Туҡһары түбәһенең Бүреләр араһы башҡорто Ғатаулла Әбделмәлик улының тыуған йылын асыҡлау, шәжәрәһен төҙөү, Вәлит ауылы тарихын өйрәнеү хыялы менән яна башланым.

Вәлит ауылы рәсми рәүештә 1795 йылда ауыл булараҡ теркәлә. Ҡыуат ауылы түңгәүерҙәрҙе элекке йәйләү урындарында яңы ауыл һалырға ҡарар итә. Уны Ғатаулла ишандың ҡартатаһы Әлибайҙың бер туған ҡустыһы Вәлит Ирғәли улы (1786-1860) нигеҙләй. Вәлит ауылында әсәһе ҡарынынан айырылған Ғатаулла әүлиәнең шәжәрә ебе ошолай: Аҡкейектән - Түңгәүер, унан - Ҡаратөлкө, унан - Күстәнә, артабан Туҡһары - Дәүләтсура - Төйән - Һөйөндөк - Хәсән - Ҡыуат - Ирғәле - Әлибай (1783) - Әбделмәлик (1805) - Ғатаулла (1836 - 1914) - Ҡыяметдин (1892 - 1944) - Зәйнулла (20.06.1926) - Иштуған (1955) менән Ишмырҙа (1960).

Бик мәшһүр заттан булып сыҡты Ғатаулла ишан. Уның хәҙерге Баймаҡ районындағы боронғо Түңгәүер ауылы Ҡыуатҡа нигеҙ һалыусы бабаһы Ҡыуат Хәсәнов 1773-1775 йылдарҙағы ихтилалда бик әүҙем ҡатнаша. Ул - Пугачев полковнигы. Үҙенең ғәскәре менән дошманды ҡыйратып йөрөй. Тик әлегә, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, уның шәхесе тейешенсә баһа алғаны юҡ.

Ҡартатаһы Әлибай Ирғәлин оҙаҡ йылдар Ялан-Түңгәүер улусы старшинаһы, йәғни башлығы булып тора. Зауряд есаул дәрәжәһендә отставкаға сыға. Элекке Ялан-Түңгәүер улусының территорияһы хәҙерге Йылайыр районыныҡына тиң. Тимәк, зауряд есаул Әлибай Ирғәлин хәҙерге район хакимиәте башлығынан да ҙурыраҡ дәрәжәлә булған.

Атаһы Әбделмәлик Әлибаев Вәлит ауылында указлы аҙансы (мөәҙзин) була һәм улының - 1836 йылдың Түңгәүер улусының Вәлит ауылында донъяға килгән һәм 1914 йылда шунда уҡ донъя ҡуйған мәшһүр Ғатаулла ишандың йәштән Ислам диненә ылыҡып үҫеүендә, аҙаҡтан күренекле дин әһеле, башҡорт халҡының рухи ҡеүәтен арттырыусы һәм һаҡлаусы әүлиәгә әйләнеүендә, әлбиттә, ҙур роль уйнай.

Рәшит Шәкүр һүҙҙәре менән әйткәндә, илебеҙҙең бындай изге заттарының исеме онотолорға тейеш түгел, уларҙың яҡты рухына ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп көн итһәк, дөрөҫ юлда булырбыҙ, туғандар!

**Сәлмән ЯРМУЛЛИН.**

***Әйткәндәй...***
***11 июлдә Хәйбулла районы Вәлит ауылы янында ерләнгән Ғатаулла ишан рухына зыярат ҡылыуға, Зәйнулла ишан, Ғабдулла Сәиди ишан, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡа ишандар, әүлиәләр, батырҙарыбыҙ, күренекле шәхестәребеҙ рухына бағышлап, шулай уҡ Башҡортостаныбыҙ именлеге өсөн аяттар, доғалар уҡыуға арналған йыйын үткәрелә. Унда республиканың төрлө райондарынан мосолман ҡәрҙәштәр саҡырыла. Йыйындың башланыу ваҡыты: 11 сәғәттә.***

**Ойоштороу комитеты.**

*АРҘАҠЛЫЛАР*



# ФӘТКЕЛҠАДИР ИНАН

Бөйөк башҡорт шәхестәренең береһе, сәйәсмән, яҙыусы, ғалим-фольклорсы һәм билдәле дин әһеле Фәткелҡадир Инандың (Фәткелҡадир Мостафа улы Сөләймәновтың) тыуыуына быйыл 120 йыл тула. Ул 1889 йылдың 29 ноябрендә хәҙерге Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районының Шығай (Һарыҡулмәк) ауылында тыуған. Ошо боронғо башҡорт ерҙәренең 1934 йылға тиклем Башҡортостанға ҡарағаны тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк.

Ислам диненә, фәнгә, төрки мәҙәниәтенә - ошо өс идеалға инанған һәм шуға Инан исемен алған Фәткелҡадир Сөләймәновтың йәш сағы Рәсәйҙәге тарихи түңкәрелеш заманына тура килеп, алдынғы ҡарашлы башҡорт инсаны булыуы уға ни тиклем ауырлыҡтар һәм бәләләр алып килеүен тик ошо быуын кешеләре генә беләләр. Әхмәтзәки Вәлидиҙең иң яҡын һәм тоғро арҡаҙаштарының береһе булған Фәткелҡадир ҙа, сит илдәрҙә эмиграцияла йәшәгән көйө бөтә ауырлыҡтарҙы үтеп сығып, күренекле ғалим сифатында танылыу таба. Тик шуныһы: үҙенең тыуған ерендә ул әле лә тейешенсә баһаланмаған, тип әйтергә була. Исмаһам, уның шәхесенә арналған берәй ғилми-ғәмәли конференция ойошторолһон ине.

2000 йылда Зәки Вәлидигә арнап уҙғарылған сарага Инандың улы Йәшәр ҙә саҡырылғайны. Ләкин ошо саҡырыу ҙа исем өсөн генә булды шикелле. Зәки Вәлидиҙең балаларына атаһының тыуған яғында байрам тантаналарында ҡатнашыу насип булһа, Йәшәр ундай хөрмәттән мәхрүм ҡалды. Уға үҙенең яҡташтары, ҡан-ҡәрҙәштәре менән осрашыу мөмкинлеге бирелмәне. Әммә уның менән телефондан һөйләшеүебеҙҙән аңлашылыуынса, ул да атаһының ауылын һәм туғандарын күрергә бик теләй ине.

Хәҙер Йәшәргә 70 йәш тирәһе, иҫән булһа, эшләмәйҙер инде. Әммә урман инженеры вазифаһында ғына эшләгән кешенең үҙ иҫәбенә яңынан Башҡортостанға килә алыуы икеле. Беҙ уны саҡырып килтерә алһаҡ, атаһы тураһында иҫтәлектәрен һөйләтеп, Ф. Инандың беҙгә билдәле булмаған мираҫын ҡайтарыу мәсьәләһен дә хәл итә алыр инек. Уның тормошо һәм ижады тураһында Дамир Вәлиевтың, Миңлеғәли Нәҙерғоловтың яҙмалары баҫылып сыҡһа ла яҡшы булыр ине, тим.

Быйыл август-сентябрь айҙарында уҡ Фәткелҡадир Инандың тыуған ауылы Шығайҙа уның тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы хәтер кисәһе уҙғарыу фарыз. Беҙ халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы, Башҡортостан азатлығы өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булған шәхесебеҙ рухына оло хөрмәтебеҙҙе ошо рәүешле булһа ла белдерә алһаҡ, бик сауаплы эш эшләр инек.

**Фатих ШӘЙХИСЛАМОВ.**

✓ *Әгәр ир кеше бешкән ашты ла йылытып ашамай икән, ундай ирҙән ниндәй лидерлыҡ көтәһең? Уй-хыялдары менән уртаҡлашып, тегеләй итһәк, нисек булыр, былай итһәк, нисек булыр, тип кәңәшләшкән иргә кем ҡаршы килер ине икән?*



**"Йомшаҡлыҡ, күркәмлек, мөләйемлек, ниндәй генә эштә һәм мөғәмәләлә булһа ла, эйәһенә зиннәт, биҙәк, матурлыҡ килтерер. Ниндәй генә эштә был сифаттарҙан ситләшелһә, яманлыҡ, ҡәбәхәтлек килтерер", тип әйтелә Бәйғәмбәр хәҙистәрендә. Башҡортостандың халыҡ артисы Суфия ҠОРБАНҒӘЛИЕВА менән шағирә Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА ла тап бына шул тыйнаҡлығы, мөләйемлеге, күркәм холҡо менән тормошта ла, ижадта ла матур булып ҡала белгән ханымдар. Улар менән ошо матурлыҡҡа, күркәмлеккә нисек өлгәшеүҙәре тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ та инде.**

# РУХИ БӨТӨНЛӨК

## күркәм холоҡтарыбыҙ

**▸ Ҡатын-ҡыҙҙың йәшен һорамайҙар, тиҙәр. Һеҙ үҙ йәшегеҙҙе йәшерәһегеҙме? Был йәштә үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?**

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Йәшкә артыҡ әһәмиәт тә бирмәйем, йәшереп тә бармайым. Йәшәлгән йәш һаны мөһим түгел, ә шул йылдарҙа эшләнгән эш мөһим. Шуға күрә, "Уй, миңә 60 йәш, мин ҡартайҙым инде", тип уйлау башыма ла инеп сыҡмай. Был донъяла бөтә нәмә лә сағыштырмаса бит. Әгәр ҙә мин үҙемде утыҙ биш йәшлек, ә ҡайһы саҡта хатта ун һигеҙ йәшлек итеп тоям икән, йәш күрһәткесе нимә ул!

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Түңәрәк йәште йәшереп булмай инде ул, киреһенсә, уның түбәһенән ҡарап үткәндәрҙе барлау, киләсәккә күҙ һалыуҙы үҙең дә тәбиғи итеп ҡарайһың, башҡалар ҙа һинән ниндәйҙер һығымта яһауҙы көтә һымаҡ. Аҡыл менән ошо йәшкә етеүеңде аңлаһаң да, һис тә 50 йәш тулған кеүек түгел, әйтерһең, ҡан ҡайнап, көс ташып тора, эшләйһе эштәр бихисап, йәшәйһе йылдар алда кеүек. Күңел ҡартаймауы шулдыр ул.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Тормошта бит, йәш булыуына ҡарамаҫтан, күңеле менән ҡартайған кешеләр ҙә осрап ҡуя. Ундайҙар менән аралашыуы ла бик ауыр, сөнки улар үткән тормош менән йәшәй, бөгөнгө көнөнә ризаһыҙлыҡ белдерә, алға ынтылыусан булмай. Бер туҡтауһыҙ мыжып, һөйләнеп, йөҙ һытып тик йөрөй ундайҙар. Уларҙы урындарынан ҡуҙғатыуы, яҡтылыҡҡа алып сығыу ауыр була. Бындай төшөнкөлөккә бирелеүсән кешеләргә үҙендә рухи көс табырға кәрәк. Мистик телдә әйткәндә, тән - үткәндәр, йән - бөгөнгө, ә рух киләсәк менән йәшәй икән. Йәғни бөгөнгөң булмаһа, иртәгәң дә булмай тигән һүҙ. "Үткән эштән төш яҡшы" тип халыҡ белмәй әйтмәгәндер.

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Төшөнкөлөккә бирелеү һәр кем менән булыуы ихтимал. Тап ошондай күңел төшөнкөлөгө кисергән ваҡытта кеше аңһыҙ аҙымдарға бара: үҙ-үҙенә ҡул һала, был донъяла йәшәүҙән ваз кисә. Бындай саҡтарҙа эске көстө уята белергә кәрәк. Һәр кемдә бар ул рух көсө.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Һәм бындай саҡтарҙа кеше үҙ-үҙенә: "Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙгә был ғүмер бушҡа ғына бирелмәгәндер бит?" тигән һорау бирергә тейеш. Тормош - ул һынау, беҙ шул һынауҙы үтер өсөн килгәнбеҙ. Беҙ ошо һынауҙарҙың ни өсөн бирелеүенә төшөнәбеҙ икән, беҙҙең алдыбыҙға әле Әлфиә әйтеп үткән рухи көс үҙенән-үҙе килеп сыға һәм фекер рәүешендә яуап та тыуа. Фекер - энергия бит ул, беҙҙең эргә-тирәбеҙҙә осоп йөрөй.



***Тормошта бит, йәш булыуына ҡарамаҫтан, күңеле менән ҡартайған кешеләр ҙә осрап ҡуя. Ундайҙар менән аралашыуы ла бик ауыр, сөнки улар үткән тормош менән йәшәй, бөгөнгө көнөнә ризаһыҙлыҡ белдерә, алға ынтылыусан булмай. Бер туҡтауһыҙ мыжып, һөйләнеп, йөҙ һытып тик йөрөй ундайҙар. Уларҙы урындарынан ҡуҙғатыуы, яҡтылыҡҡа алып сығыу ауыр була. Бындай төшөнкөлөккә бирелеүсән кешеләргә үҙендә рухи көс табырға кәрәк. Мистик телдә әйткәндә, тән - үткәндәр, йән - бөгөнгө, ә рух киләсәк менән йәшәй икән. Йәғни бөгөнгөң булмаһа, иртәгәң дә булмай тигән һүҙ. "Үткән эштән төш яҡшы" тип халыҡ белмәй әйтмәгәндер.***

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Ә ул фекерҙе беҙгә Юғары көс бирә. Рухи көскә эйә булыр өсөн кеше яңғыҙ ҡалып, Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнеш булдырырға тейеш. Беҙҙең тормош ваҡ мәшәҡәттәр, ығы-зығы менән тулы бит. Ана шул бөтмәҫ проблемалар, эштәр араһында ваҡыт табып, эске донъяңа мөрәжәғәт итеп, Юғары көс менән бәйләнешкә инеп, кеше үҙ асылына ҡайта ала. Теләһә ниндәй ситуациянан да сығыу юлы, ҡотолоу сараһы бар.

**▸ Түңәрәк йәштең түбәһенә менеп ултырғас, кеше үҙенең үткән тормошона әйләнеп ҡараусан. Һеҙҙең үткәндәрҙә ниҙәр ята? Нимәләр хәтерҙә уйылып ҡалған, үкенестәр бармы?**

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Үткән тормошома күҙ һалып, уның боролоштарына туҡтап киткәндә, уның бер ерен дә үҙгәртмәҫ инем. Шул уҡ актерлыҡ һөнәренә уҡыр инем, студенттарҙы уҡытыу ҙа минең яратҡан эшем. Ошо ике һөнәрҙе сәнғәттә бергә алып бара алыу минең өсөн иҫ киткес ҡыуаныс та, сикһеҙ ҡәнәғәтлек тойғоһо ла бирә. Әлбиттә, ул еңел түгел. Үкенестәрем юҡ минең, шул яҡтан бәхетлемен. Ә шулай ҙа тормош булғас, яңылыш аҙымдар яһаған саҡтар ҙа булғылай, әммә улар киләсәктә бындай хаталарҙы бүтән ҡабатламаҫ өсөн һабаҡ булып торорға, кешене уй-фекергә этәрергә тейеш.

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Минең дә бер ваҡытта ла тормошома, бигерәк тә һайлаған һөнәремә ҡарата үкенесем булманы. Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә эшләүемә быйыл егерме ете йыл була. Нәшриәттә эшләү шағирә булараҡ минең төп тәғәйенләнешемә бер ҙә хилафлыҡ килтермәне, шул уҡ ҡағыҙ, ҡәләмем һәр ваҡыт эргәмдә булды. Йөрәкте бер генә үкенес өйкәй - ул да булһа ҡыйыуһыҙ булыуым. Холҡомдағы ошо сифат арҡаһында үҙ ваҡытында әйтер һүҙемде әйтә алмай, эсемдә йомоп ҡалдыра килдем, аҙаҡ улар шиғри юлдар булып күңелдән эркелә ине. Әммә бөгөн ижадта үҙ юлымды тапҡанмын икән, ниндәйҙер уңыштарға өлгәшкәнмен икән, тимәк, миндә йөрәк ҡыйыулығы ла йәшәйҙер. Тап ана шул эске көс мине тормош юлында аҙаштырмаҫҡа, тура юлдан йөрөргә, кеше араһында ла үҙеңде лайыҡлы тоторға ярҙам итәләр ул.

**▸ Һеҙ үҙ атай-әсәйегеҙҙән ниндәй тәрбиә алдығыҙ, үҙегеҙ балаларығыҙға ниндәй тәрбиә бирергә тырышаһығыҙ? Ғөмүмән, ижад кешеләре бала тәрбиәләүгә тулыһынса ваҡыт бүлә аламы?**

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Минең әсәйем иҫ киткес йомарт һәм бик аҡыллы кеше булды. Ә кәрәк сағында кешегә "зыңҡ" иткәнсе тураһын бәреп әйтә ине. Уны яраталар ҙа, уға ылығалар ҙа һәм унан ҡурҡалар ҙа ине. Әсәйем ҡатылыҡ менән тәрбиәләһә, атайым йомшағыраҡ булды. Атайым әкиәттәр, үҙе үткән һуғыш юлдары ваҡиғаларын һөйләп, мауыҡтырып, күккә күтәреп үҫтерһә, әсәйем ҡатын-ҡыҙ булараҡ тормошта үҙеңде нисек тоторға, донъя көтөргә, хатта иҙәнде нисек йыуырға, нисек ашарға бешерергә кәрәклеген өйрәтте. Кешеләрҙе ныҡ ярата ине ул. Ошо йомартлыҡ, кешеләрҙе яратыу, алсаҡлыҡ кеүек сифаттарҙы күсерә алған ул миңә лә. Мин тулы ғаиләлә үҫеп, бәхетле балалыҡ йылдары үткәрҙем, әле лә ул саҡтарҙы һағынам.

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Атайлы-әсәйле булып үҫеүемә үҙемде сикһеҙ бәхетле кеше, тип һанайым. Әсәйем менән атайымдың бергә татыу ғүмер итеүҙәренә быйыл 55 йыл туласаҡ. Атайым ғүмер буйы электрик булып эшләп, биш ауыл һәм ферманы хеҙмәтләндерҙе, күп ваҡыт өйгә йоҡларға ғына ҡайта ине. Әсәйем төрлө эштәрҙә эшләне, сөгөлдөр үҫтерҙе, бер генә минут буш ваҡыты булманы. Икеһе лә хеҙмәт ветераны. Ете балаға ғүмер биреп, уларҙы кеше итеп тәрбиәләүҙә әсәйемдең роле баһалап бөткөһөҙ. Ул уңған, сабыр, аҡыллы ҡатын. Ул беҙҙе хеҙмәт аша тәрбиәләне. "Эшләгәнең минең өсөн булһа ла, өйрәнгәнең үҙең өсөн", тиер ине. Ғәйбәт һөйләмәгеҙ, һүҙ йөрөтмәгеҙ, алдашмағыҙ, кешенең энәһенә лә теймәгеҙ, алтыны өйөлөп ятһа ла, бөртөгөн дә алмағыҙ, тигән өгөт-нәсихәттәре; тормош булғас, төрлө саҡтар була, түҙемле булығыҙ, яндырайлыҡ яҡшыға илтмәй, тип өйрәтеүҙәре ғүмер юлдарында таяныс булды. Әсәйем әле лә йор һүҙле, тормоштоң һәр осрағына йыртаҡмағы әҙер, һүҙҙе мәҡәл-әйтемдәр аша ғына һөйләр зат. Йомартлыҡ, кешелеклек сифаттарын да күңелебеҙгә ул һалды.

Ә бөгөн заман башҡасараҡ һәм балаларға ла бер аҙ бүтәнсәрәк тәрбиә талап ителә. Мин балаларымда үҙемдә булмаған ҡыйыулыҡты үҫтерергә тырышам. Балаларым кескәй саҡтарынан шиғыр, әкиәттәр тыңлап, китапҡа ылығып үҫте. Өйҙә гел башҡорт телендә һөйләшәбеҙ, шуға күрә мәктәптә балаларға шиғыр, инша яҙыу, телдән яуап биреү ауырлыҡ тыуҙырмай. Конференция, олимпиадаларҙа ла ҡатнашып торалар. Өйҙәге эштәрҙе бүлешеп башҡаралар, уртансы ҡыҙым Динара, форсаты булғанда, ашарға әҙерләп һөйөндөрә. Йәйге каникулда ҡартатай-ҡартинәйҙәрендә баҡсала сүп уташып, көтөү көтөшөп, бесән әҙерләргә ярҙам итәләр. Ғөмүмән, бер эштән дә йөҙ сөйөрмәйҙәр, тырышып уҡыйҙар. Иртәгәге көнгә ышаныс, имен донъя, татыу ғаилә булһа, бала тәрбиәләүе бер ни түгел.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Мин ике ул үҫтерҙем. Бәләкәй саҡтарынан уҡ уларға шәхескә ҡараған кеүек, үҙемә тиң итеп һөйләшә, ҡайһы саҡта хатта уларҙан кәңәш һорап, уларҙың фекерен белә торғайным. Былар балала үҙ-үҙен ихтирам итеүгә, үҙ-үҙенә ышаныс тыуҙырыуға алып килә. Баланы бер ваҡытта ла баҫырға, ниндәйҙер ынтылыштарын сикләргә, тыйырға ярамай. Уның күңелен үҫтерә белергә кәрәк. Бала үҙен яратыуҙарын белеп, ғаиләһенә кәрәкле булыуын аңлап үҫергә тейеш. Иркә һәм яратылып үҫкән бала, ғәҙәттә, тормошта юғалып ҡалмай, үҙ урынын таба, юғары уңыштарға өлгәшә. Балаларға, бигерәк тә ҡыҙҙарға наҙҙы йәлләмәҫкә кәрәк, улар кәмһетелеп, үҙенә йомолоп үҫергә тейеш түгел. Әлбиттә, ижад кешеһе булараҡ, тәүге улыма тейешле иғтибар бүленмәне, иркәләү ҙә эләкмәне, үҙ аллы бала булып үҫте ул. Ә икенсеһенә инде тулы тәрбиә бирергә тырыштыҡ.

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Өс бала үҫтергән әсә булараҡ, минең кеҫәмдә һәр ваҡыт блокнот менән ҡәләм йөрөнө, хатта йоҡларға ятҡанда баш аҫтыма һалып ҡуя инем. Ҡайһы саҡта йоҡларға ятаһың, ҡапыл илһам килеп шиғыр тыуа. "Ҡояшҡа таж кейҙерәм" тигән китабым балаларымдың һөйләшеүҙәрен тыңлап тыуған шиғырҙарҙан ғына тора. Уларҙың

✓ ***Беҙ үҙебеҙ барыһын да үҙ өҫтөбөҙгә алып, ирҙәрҙе көсһөҙләндереп ебәрҙек. Беҙгә улар алдында бер аҙ көсһөҙ, уларҙың яҡлауына, һаҡлауына мохтаж булып күренергә кәрәк, аҡыллы ҡатындар тап шулай эшләй.***

# ТЫУҘЫРЫУҒА...

## булышлыҡ итә

һәр әйткән һүҙе - үҙе бер фекер бит ул, уны эләктереп алып, шиғыр юлдарына һалыу ғына бурыс. Дөрөҫөн әйткәндә, минең ултырып ҡына шиғыр яҙғаным да юҡ. Балалар ваҡ булғанда былай ҙа форсат булманы, хәҙер ҙә эш араһында яҙыла улар.

▸ **Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙы һәм заман ир-егеттәре хаҡында ниндәй фекерҙәһегеҙ? Уларҙа ниндәй сифаттар, ниндәй ҡылыҡтар оҡшай, нимә оҡшамай?**

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Бөтә кеше лә Аллаһы Тәғәлә тарафынан йөҙгә сибәр булып яратылмаҫҡа мөмкин. Тик эсендә ҡатын-ҡыҙ йәне булған гүзәл зат күркәмлеккә ынтылырға, матур сифаттарын үҫтерергә тейеш. Күңеле матур кешенең йөҙөнән, күҙҙәренән нур бөркөлөп тора. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында түҙемһеҙ, гел генә ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөгәндәр ҙә осраштырғылай. Бөтә донъяға асыу һаҡлап, йөҙө йәмерәйеп, күҙҙәре һалҡынлыҡ бөркөп йөрөгән кеше ни тиклем генә сибәр булмаһын, йәмһеҙ күренә лә ҡуя.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Ҡатын-ҡыҙ - ул гүзәллек өсөн яратылған нәфис зат. Шул гүзәллекте ғүмере буйы һаҡлап алып барырға тейеш. Үҙенең һын-килбәте, йөҙ-ҡиәфәте, холоҡ фиғеле, эшләгән эштәре аша шәхси өлгөһөндә ошо матурлыҡ, камиллыҡ сағылырға тейеш. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе ҡатын-ҡыҙ, гүзәл зат, әсәй, ғаилә усағын һаҡлаусы итеп яралтҡан икән, беҙ үҙебеҙҙең ошо тәү бурысыбыҙға тоғро ҡалырға, уны лайыҡлы башҡарырға тейешбеҙ.

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Ҡатын-ҡыҙҙың эшмәкәрлеге күп яҡлы. Уның барыһына ла өлгөрөүенә хайран ҡалырлыҡ. Быны, мәсәлән, шундай ирҙәр була: әгәр ир кеше бешкән ашты ла йылытып ашамай икән, ундай ирҙән ниндәй лидерлыҡ көтәһең? Алдағы көнгә план ҡороп, уй-хыялдары менән уртаҡлашып, тегеләй итһәк, нисек булыр, былай итһәк, нисек булыр, тип кәңәшләшкән иргә кем ҡаршы килер ине икән? Ундайҙар лидерлыҡ позицияһында торалыр. Өндәшмәй генә, һәр нәмәгә битараф төҫтә, әҙерҙә ашап, сканворд сисеп, телевизор ҡарап ятыусылар ҙа була бит әле. Кемдер донъяны алып барырға тейеш. Тормоштоң күҙгә күренгән һәм күренмәгән әллә күпме проблемалары етерлек. Ҡайһы бер мәсьәләне нисек сисеү тураһында кәңәш-төңәш итә башлаған ҡатынына, үҙең ҡара инде, һин яҡшыраҡ беләһең бит, тип ҡул һелтәһә, ҡатын кешегә нимә эшләргә ҡала? Ир кеше үҙ ирке менән лидерлыҡтан баш тарта булып сыға түгелме һуң? Әлбиттә, бер-береһенең кәңәшен тыңлап, аңлашып йәшәгән ғаилә ағзалары күпкә бәхетлерәк был осраҡта.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Беҙҙең эргәләге ир-егеттәр йомшарып китһә, ҡатын-ҡыҙҙар көслө булырға мәжбүр. Шуға ла һәр кем үҙ урынында булырға тейеш. Ир - ир булып ҡалһын, ҡатын-ҡыҙ үҙенекен белеп эшләһен. Ошо гармония боҙолһа, ҡатын-ҡыҙ бөтә йөктө үҙ елкәһенә ала ла, һөйрәй башлай. Һуңғы ваҡытта ирҙәр ҡатын-ҡыҙға һалышып та китте шул. Ирҙәр көслө булырға ярата, беҙ үҙебеҙ барыһын да үҙ өҫтөбөҙгә алып, уларҙы кәмһетеп, көсһөҙләндереп ебәрҙек. Беҙгә улар алдында бер аҙ көсһөҙ, уларҙың яҡлауына, һаҡлауына мохтаж булып күренергә кәрәк, аҡыллы ҡатындар тап шулай эшләй. Ә беҙ уңайһыҙланған булабыҙ. Бында ғәйеп ике яҡта ла барҙыр инде.



***Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә эшләүемә быйыл егерме ете йыл була. Нәшриәттә эшләү шағирә буларак минең төп тәғәйенләнешемә бер ҙә хилафлыҡ килтермәне, шул уҡ ҡағыҙ, ҡәләмем һәр ваҡыт эргәмдә булды. Йөрәкте бер генә үкенес өйкәй - ул да булһа ҡыйыуһыҙ булыуым. Холҡомдағы ошо сифат арҡаһында үҙ ваҡытында әйтер һүҙемде әйтә алмай, эсемдә йомоп ҡалдыра килдем, аҙаҡ улар шиғри юлдар булып күңелдән эркелә ине. Әммә бөгөн ижадта үҙ юлымды тапҡанмын икән, ниндәйҙер уңыштарға өлгәшкәнмен икән, тимәк, миндә йөрәк ҡыйыулығы ла йәшәйҙер. Тап ана шул эске көс мине тормош юлында аҙаштырмаҫҡа, тура юлдан йөрөргә, кеше араһында үҙеңде лайыҡлы торорға ярҙам итәлер ул.***

▸ **Ижад өлкәһендә эшләгән ҡатын-ҡыҙ, ғәҙәттә, ғаилә бәхетенән мәхрүм, тигән ҡараш йәшәй. Һеҙ бының менән килешәһегеҙме?**

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Һис тә килешмәйем. Бәхетен дә, бәхетһеҙлеген дә кеше үҙе ҡора. Эшенә аҡса, икмәк өсөн генә үҙендә мәжбүри рәүештә йөрөтәһең икән, унан күңелең һынып, төшөнкөлөккә бирелеп, һалҡын өйгә ҡайтаһың икән, был бәхет тип атап булмайҙыр. Ә, киреһенсә, эшенә ҡанатланып бараһың, өйөңә ҡайтҡанда яҡындарыңдың һине һағынып көтөп тороуҙарын беләһең икән, ошонан да ҙурыраҡ тағы ниндәй бәхет бар?! Шул уҡ ваҡытта кеше үҙ бәхетен насар ҡылығы, хата аҙымы, һаҡһыҙ эш итеүе менән юҡҡа сығырыуы ла ихтимал. Барыһы ла үҙеңдән, рухи донъяңдың байлығынан тора. Һәр нәмәлә лә сама белергә кәрәк.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Әгәр ҙә һин яратҡан эшеңдә бәхетлеһең икән, тимәк, был бәхет өйгә лә әйәреп ҡайта. Өйҙә ниндәйҙер етешһеҙлектәр булыуы мөмкин, әлбиттә, шуныһыҙ булмай, әммә ижадтағы бәхет ғаилә бәхетенә лә көс бирергә тейеш. Гармония булғанда ғына тулы бәхеткә өлгәшеп була. Был гармония боҙола икән, бәхет тә кителә. Ошо гармонияны һаҡларға тырыша икән ижад кешеһе, тимәк, ул һәр ерҙә, һәр ваҡыт бәхетле.

▸ **Өйҙә һеҙ ниндәй хужабикә? Ирҙәрегеҙҙе, балаларығыҙҙы ниндәй аш-һыу менән һыйлайһығыҙ?**

**Ә. ӘСӘҘУЛЛИНА:** Ғаиләмде үҙебеҙҙең башҡорт аштары менән һыйларға яратам. Уларҙың маҡтай-маҡтай ашауҙарын күреү - үҙе бер кинәнес. Ҡыҫтыбый, бәлеш, ваҡ бәлеш, бишбармаҡ, һалма - иң яратып бешергән аштарым. Шуларҙың береһен гәзит уҡыусыларына ла тәҡдим итәйем әле: "Тауыҡ бауыры менән йомортҡа табейәһе" тип атала ул. Башлы һуған менән йәшел петрушканы турап, үҫемлек майында ярылаш ҡыҙҙырғас, ваҡлап туралған тауыҡ бауырын өҫтәп ҡыҙҙырырға, йомортҡаны тоҙ менән яҡшылап туҡып, өҫтөнә ҡойорға. Тиҙ үк бешеп сыға, үҙе бик тәмле һәм туҡлыҡлы була.

**С.ҠОРБАНҒӘЛИЕВА:** Әлеге лә баяғы күңелең бөтөн, рухың күтәренке икән, яҡындарыңды тәмле ризыҡ менән һыйлау өсөн айырыуса бер ләззәт менән эшкә тотонаһың. Мин ғүмер буйы бер ниндәй ҙә рецепҡа ҡарап бешергәнем булманы. Күңелем нисек ҡуша, шулай итеп әҙерләйем. Яратҡан ирен, балаларың бешергән ашыңды оҡшатып, маҡтай-маҡтай ашап, аҙаҡтан рәхмәт әйтеп тороп китә икән, ҡатын-ҡыҙ өсөн ошонан да бәхетлерәк мәл юҡтыр.

**Шулай итеп...**

**Һүҙҙе ҡайһы ғына юҫыҡҡа борғанда ла һөйләшеү барышында күңел матурлығы, рухи күтәренкелек, эске ҡеүәт тигән төшөнсәләр әленән-әле ҡабатланып килде. Тимәк, башта әйтеп үткән хәҙис юлдары ошо ике ижад әлиһәһе тормошонда ла раҫланыш тапҡан. Тап ошо сифаттар ҡатын-ҡыҙҙы йәшәтә лә, йәшәртә лә, ижадҡа ла этәрә, хәстәрлекле әсәй ҙә итә. Эске донъяға йәшеренгән күҙгә ташланып бармаған бындай сифаттар, ә ниндәй юғары көскә эйә. Ә беҙ йыш ҡына тышҡы ялтырауыҡҡа, тәкәбберлеккә, фыртлыҡҡа ынтылабыҙ...**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА
әңгәмә ҡорҙо.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## Бисәләр һымаҡ... Ирҙәр һымаҡ...

-Бисәләр һымаҡ ҡыланаһың...
-Бисәләр һымаҡ илап ултырма әле...
-Бисәләр һымаҡ кеше һөйләп ултырма бында...
-Бисәләр һымаҡ туҡтауһыҙ мыжыйһың, әй...
-Бисәләр һымаҡ игәйһең дә игәйһең...
-Бисәләр һымаҡ...

Был һүҙҙәрҙе ирҙәр йыш ҡына бер-береһен тәнҡитләгәндә ҡуллана.

-Ирҙәр һымаҡ ҡылана...
-Ирҙәр һымаҡ кейенеп алған...
-Ирҙәр һымаҡ эшләй, әй...
-Ирҙәр һымаҡ эсә, тарта...
-Ирҙәр һымаҡ көслө бит әле үҙе...
-Ирҙәр һымаҡ...

Был һүҙҙәрҙе ҡыҙ-ҡатындар тураһында сөйнәгәндә ҡабатлайҙар.

Ни эшләмәк кәрәк, ролдәр алмашына бара.Тик бында кемделер ғәйепләү... Ғәйеп эҙләй башлаһаң, "атта ла бар, тәртәлә лә" икәнен беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ таный. Шуға ла, әйҙәгеҙ, ролдәр алмашыныуҙа заманды ғына ғәйепләйек тә ҡуяйыҡ. Иң яҡшыһы, берәүҙе лә ғәйепләмәйек. Ғәйепләү, үпкәләү, асыуланыу тойғоларынан арынайыҡ әйҙә... Сөнки был бик йәмһеҙ, был бик күңелһеҙ, был бик ытырғаныс күренеш, билләһи...

Ғәйепләү, үпкәләүҙәрҙең шул тиклем йәмһеҙ күренеш икәнен бер генә миҫал аша күҙ алдығыҙға килтерәм дә...

...Был ике ир-азаматты бик ныҡ хөрмәт итәм, ағайҙарым һымаҡ күрәм. Сөнки тормошта уларҙың ярҙамы ла, кәңәше лә күп тейҙе миңә. Мин уларҙы яҡшы, аҡыллы кешеләр, талантлы шәхестәр итеп беләм. Әммә...

Береһе менән осрашып, донъя хәлдәре тураһында һөйләшә башланыңмы, мотлаҡ ошо һүҙ ҡыҫтырылмай ҡалмай: "Теге һинең яратҡан ағайың..." Икенсеһе менән һөйләшкәндә лә ошо уҡ һүҙҙәр ҡабатлана: "Теге һинең яратҡан ағайың..." Миңә йыш ҡына улар араһында "Юҡ, һин ул ағайым тураһында дөрөҫ уйламайһың, ул ундай түгел", тип, адвокат ролен үтәргә тура килә. Әммә уларҙы был һүҙҙәргә ышындырырмын тимә. Ә бит был ағайҙарҙың икеһе лә тормошта бер үк маҡсат - халҡыбыҙға хеҙмәт итеү, үҙ халҡының лайыҡлы улдары булыу маҡсаты менән йәшәй. Шул маҡсатҡа өлгәшкәндәр, хөрмәт яулағандар.

Улар араһынан ниндәй "ҡара бесәй" үткән, тиһегеҙ? Был һорауҙы бер ҙә генә лә асыҡларға ынтылмай инем. Сираттағы бер осрашыуҙа береһенә бирҙем шул һорауҙы. Ул ниндәйҙер бер минең ҡарашҡа әһәмиәтһеҙ генә тойолған ваҡиға тураһында һөйләне (эш буйынса ундай ғына фекер айырымлыҡтары булып тора инде ул). Шул ваҡиғанан алып был икәү бер-береһенең исемен дә ишетә алмай икән. Йә, Хоҙай! Ә мин улар икәүләп бер гүзәл затты бүлешә алмаған икән, тип уйлай яҙғайным...

"Кит инде, бисәләр шикелле, бер-береһенә теш ыржайтыуҙан бушамай бынауҙар", тип әйтер инем дә... Бик ныҡ хөрмәт итәм уларҙы. Уларҙың үсегеү, үпкәләү, нәфрәт кеүек ҡылыҡтарҙан өҫтөн булыуҙарын бик теләйем. Ирҙәр ваҡ-төйәккә иғтибар итергә тейеш түгел, тип беләбеҙ бит беҙ. Ҡайһы саҡта, бисәлегеңә барып, ошондай ваҡ-төйәккә бирелеп, ҡыҙып киткән саҡтарҙа эргәндә бер ир-азаматтың көләмһерәп кенә: "Ҡуйсәле, онот ундай ваҡ-төйәкте, өҫтөн бул уларҙан, бисәсәсә булма",- тип әйтеүе генә лә шундуҡ асыуыңдан арындыра. Әлеге ағайҙарымдың да асыуын ошо һүҙҙәр менән һыпырып алырға ине ул.

"Әллә мин һеҙҙең икегеҙҙе бергә осраштырып, һөйләштереп, аңлаштырайыммы?" тип тәҡдим иттем бер көн береһенә. Яҡын да килмәне. Йәә-әәл...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

РУБРИКА ТӘҠДИМ ИТӘМ: "СУРЫТЫУ"

# СУРЫТЫУ - АЛДАУ ТҮГЕЛ,

## ул булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, аҙ ғына шаштырыу өҫтәп һөйләү

**Сурытып һөйләү шаян телмәргә биҙәк өҫтәүҙән ғибәрәт. Һүҙ барған төп ваҡиға булған хәлдәргә нигеҙләнә һәм кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән йөплләй барыла. Башлап һөйләүсе әңгәмә барышында һәр саҡ йөпләүсенең баш һелкеп, эйәк ҡағып йәки дәртләндергес һүҙҙәр менән хуплап ултырыуына мохтаж була. Ундай кеше, ғәҙәттә, ҡатыны йәки был ваҡиғаның шаһиты, йә булмаһа башҡа кешеләрҙән ишеткән була. Сурытыу - алдау түгел, ул булған хәл-ваҡиғаға биҙәктәр, сағыштырыуҙар, аҙ ғына шаштырып ебәреүҙәр өҫтәп һөйләү. Ул ғына ла түгел, оҫта һөйләүсе тыңлаусыларҙың кәйефен, тыңлай белеү һәләтен һәм был әңгәмәлә ҡатнашыу-ҡатнашмау кимәлен дә иҫәпкә ала. Төп һөйләүсе өсөн барыһының да тыңлап, ихлас көлөп, ҡатнашып ултырыуы, уның сурытыу оҫталығына телдән түгел, ә ҡарашы, ым-ишараһы менән баһа биреп ултырыуы ла мөһим. Әгәр арала берәйһе ваҡиғаға ҡарата битараф йәки иғтибарһыҙ булһа, оҫта һөйләүсе әңгәмәһенә уның үҙен дә ҡушып ебәрә. Әңгәмәһендәге төп геройҙы уға оҡшата йәки уның берәй туғанының был ваҡиғала ҡатнашыуын, йә булмаһа ундағы берәй геройҙы яҡшы белеүен телгә алып, йоҡомһорап ойоп ултырған тыңлаусыны уятып ебәрә. Хикәйәләү барышында кемдәндер һүҙ ҡыҫтырып ебәреүе йәки сурытыуҙы көсәйтеү маҡсатында әңгәмә һөйләп алыуы, һорау биреүе, асыҡлыҡ индереүҙе, аңлатыуҙы һорауы ғәйепкә алынмай. Киреһенсә, тыңлаусының әүҙемлеген күрһәтә. Әңгәмәсе бындай өҫтәмәләргә тулы ирек бирә һәм оҫта ғына итеп үреп ала ла китә. Әйткәндәй, сурытыусы бер ваҡытта ла үҙенә баһа көтмәй. Төп баһа ул һөйләгән ваҡиғаға ҡарата булырға тейеш. Ваҡиғаға, ундағы геройҙарға ҡарата ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәт уятыу - сурытыусының маҡсаты. Шуныһы әһәмиәтле: сурытыусы кемгәлер ғәйеп ташламаҫ, кемделер уңайһыҙ хәлдә ҡалдырмаҫ өсөн, ғәйепкә алыныр ваҡиғаның төп геройын Мин йәки Үҙем тип бәйән итә. Тыңлап ултырған саҡта быны аңлайһың, әммә хикәйәләү шул тиклем оҫта ҡорола, төп герой сүрәтендә тап уның үҙен күҙ алдына килтерәһең. Ҡоро һүҙ ҡуңалтаҡ итек, тигәндәр. Ейәнсура, Хәйбулла райондарында, Ырымбур өлкәһенең Сурай ауылында, Медногорск ҡалаһында, Һамар өлкәһенән Өфөгә күсеп килеп йәшәүсе үҫәргәндәр менән бергә булған саҡта ишеткән сурытыуҙарҙы тәҡдим итәм. Әйтергә кәрәк, минең сурытыуҙы башҡа ырыу вәкилдәренән ни өсөндөр ишеткәнем булманы.**

### МАЛАЙҘАР ИҪӘН ҠАЛДЫ, БЫЛАЙ БУЛҒАС...

Нурулла ағай менән Шәмсениса еңгәй тормоштан артта ҡалмаҫ өсөнмө, Аҡъярҙа ҙур ерҙә эшләгән улдарының кәңәше менәнме - борон-борондан йөҡләп йөрөгән урындыҡтарын заманса тимер караватҡа алмаштырған. Кем уйлап сығарғандыр инде панцир тигән унайһыҙ нәмәне, тегенең тимер селтәре бушап, урта тирәһе һәленгәндән-һәленә бара икән. Йоҡларға ятыуын унайын килтереп, яйын табып яталар, ти, тик иртән тороп китеүҙәре ауырлаша бара икән. Бер көн шулай мал бикләп, тамаҡ туйҙырып, инде генә рәтләп ятып йоҡлап киттек тигәндә, тышта ҡапыл шартлау тауышы ишетелә.

- Ай, әттәгенәһе, әбей, инде генә һинең ҡәҙереңде белеп, йүнләп йәшәй башланым тигәндә...- тип, күҙен ыуалайыуалай һиҫкәнеп килеп уяна ти Нурулла ҡарт.

**/Артабан курсив менән төп сурытыуға ҡушылып китеүселәрҙең өҫтәмәһе бирелә/**

*- Беҙҙең яҡта бер-береһенә әбей, бабай, тип өндәшәләр бит. Уныһын беләһегеҙҙер.*

- Нимә булды, бабай? - тигән әбейе, арып-талып килеп ятҡанғалыр, был тауышты ишетмәй ҡалған була.

*- Шәмсениса инәй ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булып ҡалды шул, улының ҡайғыһынан. Улдары ни, йәшләй генә һәләк булды бит Афғанда. Өйләнеп кенә киткәйне, ҡатыны бер бала менән ғүмерлеккә яңғыҙ ҡалды ла ҡуйҙы.*

*- Нурулла олатай менән Шәмсениса инәй килендәрен ташламаны, айырым йорт һалып биреп сығарҙылар ҙа ошоғаса ташламайҙар.*

*- Улының ярсығы бит бала.*

- Ишетмәнеңме ни, бомба шартланы бит. Һуғыш башланды инде, һуғыш, әбей... Төштөк карауат аҫтына. Исмаһам, тәҙрә тапҡырынан алыҫыраҡ булайыҡ. Төн сыҡҡансы иҫән-имен ҡалһаҡ, иртәгә мөгәрәптә урын әтмәлләрмен, - тигән Нурулла ҡарт, тауышы нескәреп, ҡалтыранып китте, ти.

Үҙе, әбейен тынысландыра-тынысландыра, карауаттан төшмәксе була икән. Карауаттың панциры аҫҡа һәленгән дә, йүнләп баҫа алмай ҙа ҡуя ти был. Бер аяғын күтәрһә, икенсеһен тартып ала алмай, икенсеһен күтәрһә, быныһы ҡалҡмай ыҙалана икән. Әбейе лә түмәрлеге сыға ти карауат уртаһында.

- Әйтәм мин һиңә, сит яҡтан үҙем ятайым, тип, - һуҡыранып та алған була ти әбейенә.

- Ҡасан күргәнең бар бисәнең ирҙән алда түргә барып ятҡанын?

- Уныһы шулай ҙа бит... Урындыҡҡа етәме ни, оҙонораҡ та, иркенерәк тә ине. Ҡайһы ағыған телән, шунан барып ятыла ине. Әллә ни шуны алмаштыртты бит теге шильма малай. - Тағы элеккенән дә яманыраҡ шартлау ишетелә. - Уй, әбей, тағы аттылар бит. Әйҙә, икәүләшеп ҡолап төшәйек тә ҡуяйыҡ. Юрған менән ҡуша төшһәк, ауыртынмабыҙ әле.

Нурулла ҡарт әбейен карауаттан ҡолата төртөп төшөрә лә артынса уҡ үҙе тәгәрәй.

*- Тәгәрәп төшмәй торһондар әле... Дыуарама килеп, береһе юрғанға уралып, икенсеһе панцир төбөнә төшөп зыу килгән саҡта, бабайы, былай булмай, әбей, карауатыбыҙ тәҙрәгә нығ яҡын, ауылға инеп атһалар, бөттөк, үҙ йәнебеҙҙе үҙебеҙ үлем аҫтына ҡуйбыҙ бит, - тигән, әсенеп.*

*- Ни эшләйек һуң, бабай? Команда бир атыу, бабай, команда бир, - тигән була ти әбейе.*

*- Булды атыу, әбей, дөрөҫ әйтәһен. Өҫ тигәндә һин дә, мин дә бер юлы ҡалҡынабыҙ ҙа ҡолайбыҙ ҙа төшәбеҙ. Шулайтып төшкәндәр ти улар.*

- Эйе шул. Шунан бабай: "Инә һал, әбей, карауат аҫтына. Тегеләй-былай була ҡалһа, мин алдан сығып баҫырмын", - тип, әбейен йәһәтләй башлаған.

*- Һаман үҙен уйлай. Һин сығып ҡасырһың да ул. Мин ни эшләрмен?*

- Сығып баҫырмын тейем. Һаҡ ҡолаҡ. Ин, инә һал карауат аҫтына, бызмырлама инде.

*- Яулығым ҡайҙа һуң минең? - тип һаман яулығын эҙләй ти әбейе.*

*- Карауат аҫтында һине кем күрә? - тип әрләй ти бабайы.*

- Күреүҙәме ни эш? Иҙән йыуғанда ла тимер селтәренә сәсем уралып бер булам. Тағы шулайтып сыға алмай ятмайым тейем.- Әбей яулығын эҙләгән саҡта, ҡулы ҡуйы бер нәмәне һәрмәп ала. - Уй, бабай, бында ҡан да ул. Ҡараңғы-юҡҡа ауыртҡанын да һиҙмәгәнбеҙ инде. Кемебеҙгәләр пуля эләккән бит.

- Бомбаның пуляһы булалыр шул. Ошо бисәләрҙе... Әйҙә, әләйһән, иплап кенә шыуып сығайыҡ та бер-беребеҙҙе һыйпап ҡарайыҡ. Таң атҡансы күп ҡан юғалтыуҙан үлеп ҡуймайыҡ. Ай, әттәгенәһе, әбей, яңы ғына ҡәҙереңде белеп, ипкә килеп, тәртә араһына инеп йәшәй башлағайным. Әллә ни йәш саҡта бисә ҡәҙере беленмәй бит. Алаңлап һаман шул ситкә ҡарала... Ғәҙәтеңә төкөрәйем...

Бабай, үҙалдына һөйләнә-һөйләнә, ҡараңғы бүлмә иҙәнендә ятып һәрмәнә торғас, яралы урынын таба. Ҡолаҡ тирәһендә була яраһы. Ҡулы ҡанға мансыла.

- Уй, әбейгенәм, ҡолаҡты еффәргән бит был фашист аламаһы. Яран гөләндә ынтылып ҡына ал да тупрағын усыма һал әле, тупраҡ ябайым ярағa.

- Ҡайҙан килеп инде икән ул бомбаһы? Уй, бабай, нығ ауыртамы?

*- Шырпы сыйып, усым эсендә генә утын ҡаплап абайлайыҡ әле, ҙурмы икән яраһы, былай ҡолаҡ тирәһендә ауыртыу бик нығ һиҙелмәй ҙә ул, - ти икән бабай.*

- Шулай тип тынысландыра инде үҙен. Нурулла ҡарт тотош тән тирәһен һыйпай торғас, бармаҡ битенә төйөрөм бер нәмә эләгә.

- Әбей, ҡан апаруҡ аҡҡан да туктаған, ахыры. Төйөрөмләнеп, уҡмаша башлаған шикелле. Әллә ут тоҡандырып маташмайбыҙмы? Фашистар утты күреп, был яҡҡа ынғайламаҫтармы тием дә.

- Уныһы шулай, бабай. Әйҙә, түҙгәс түҙәйек инде. Йөйге төн ҡыҫҡа була торған, таң атҡанын көтәйек, - тигән дә әбей карауат аҫтына ҡабат инеп ятҡан ти.

*- Эйе шул. Был фашистар ҡыштан ҡурҡа бит ул. Һуғышты гел йәйлы көндәрҙә, төн ҡыҫҡаһында башлайҙар. Малайҙар йәлке, әбей, малайҙар йәлке. Тегенеһе башын һалды юҡ өсөн. Афған һуғышының мәғәнәһен һаман аңлап етмәйем. Быныһы ла берәй иҫәрлектер әле, моғайын. Үҙем буйға ҡайтыһыраҡ булһам да тирәк һымаҡ малайҙар үҫтерҙек тә бит... - бошоноп ҡына һөйләнеп ята икән бабай.*

- Ни эшләп ҡапыл булды һуң был? Улай-былай бер нимә лә ишетелмәгәйне бит, - тип һаман аптырай ти әбей.

- Хәҙерге заман техникаһы ни. Күҙ асып йомған арала килде лә етте инде. Ил сигендәгеләр һиҙмәй ҙә ҡалғандарҙыр, әбей...

*- Бабай бәхилләшеү һүҙҙәре әйтергәме, йөшлек хаталары өсөн әбейенән ғәфү үтенергәме, тип күнеле үтә нескәреп китеп, хатта наҙлы итеп өндәшә "Әбей" тип, уныһы ла шундай уҡ наҙ менән: "Әү, бабай", - тигән була, ти.*

- Бабайы тағы өндәшмәй, һаман яраларын ҡарап ятҡанда, ҡулы ауып ятҡан банканы һәрмәп ала.

- Аһ, әбей, вареньебыҙ шартлаған бит.

- Ҡуй инде, ҡышҡылыҡҡа тип ҡайнатып ҡуйғайным. Күҙ алдында торһа, ашала ла бөтәлә, тип карауат аҫтына индереп ултыртҡайным шул.

- Ғүмер буйы эшкинмәнең инде. Шунан нисек... - Нурулла ҡарт йәш сағындағы мутлыҡтарының сәбәбен тағы әбейенә һылтамаҡсы була ла, тик шунда уҡ, ҡалған ғүмерен арыу ғына, әбейенең ҡәҙерен белеп кенә үткәрергә, тип, үҙенә һүҙ биргәне иҫенә төшөп, һүҙҙе икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрә. - Варенье ла булғанмы туйымлыҡ. Баш һау ҡалһа, ас булмабыҙ ҙа ул... Тукта, әбей, шул варенье шартлағанын ишетеп уянғанмын инде, әләйһә. Бомба түгел былай булғас. Былай-алай ҡурҡыуға һалмаһынмы... Әбей, һау ҡалдыҡ, былай булғас. Уй, әбей, даланыбыҙ бар икән, былай булғас. Малайҙар ҙа иҫән ҡалдылар, былай булғас...

Әллә дөрөҫ, әллә юҡ, ул әбей менән бабайҙың мәрәкәләре күп ул. Әллә бөтә ҡыҙыҡты улар исеменә бәйләй ҙә ҡуялар инде...

*- Һин үҙең дә сурытырға оҫтаһың.*

- Сурытмаһаң, ҡыҙығы буламы ни ул...

### САМОЛЕТТА

- Бер заман район үҙәктәренә кукурузник тигән бәләкәй генә самолет йөрөп ҡалды бит.

*- Уңайлы була торғайны ул, ни тиһәң дә. Ашыҡҡан саҡта, һә тигәнсә барып етелә ине баш ҡалаға.*

*- Йыш йөрөлдө инде уның менән. Летчигы, самолетты һинең өсөн генә йөрөтәбеҙ, тип шаярта торғайны.*

*- Һин депутат булып алдың түгелме ни бергелке?*

- Булдым. Эшселәрҙән - фәләнсә депутат, малсыларҙан - фәләнсә депутат, тип ғәҙел план бирелгән саҡта эләгеп ҡалдым мин дә.

Бер саҡ киттем тағы шул самолет менән баш ҡалаға. Шунда бер өлкән генә ағайҙы ла оҙатып ҡуйҙылар. Ағай, тип, илле-илле биштәрҙә булғандыр уҙа барһа. Күтәрелә башланыҡ һауаға. Самолет күтәрелгән һайын, ағайҙың күҙе аҡая бара. Шөр ебәрә, ахыры.

- Ай, әттәгенәһе, балалар ишле ине бит әле. Ай, Хоҙайым, әбейем хаҡына иҫән ҡалайым инде, - ти был үҙ алдына. Самолет тигеҙ урындан, арыу ғына барһа, тыныслана. Инде генә таулы ерҙәр башланһа, оҙон арба һымаҡ даһыр-доһор килә бит. Теге ағай тағы ҡурҡа башлай.

- Ай, әттәгенәһе, балалар ишле ине бит әле. Ай, әттәгенәһе, ҡатыным яңғыҙ башы ни эшләр икән? Әллә алдағы туҡталышта төшөп кенә ҡалайым да ҡуйайым микән?

Ағай ысынлап ҡурҡа ине. Нисек итеп йыуатайым икән, тип уйлап киләм. Тау өҫтөнән үткән саҡта ғына һелкетә, үтә ул, тип әйтеп ҡарайым, иғтибар ҙа итмәй.

- *Ысынлап та, колхоз арбаһы һымаҡ була торғайны шул. Кеменә ҡарама, ауыҙында сепрәк була торғайны.*

- *Һөйләшеп бармаҫҡамы?*

- *Ни эшләп һөйләшмәҫкә булһын инде? Унда ауыҙыңа сепрәк тыҡмаһаң да һөйләшерлек рәт ҡалмай торғайны ул, күңел болғана ине. Һин нисек түҙгәнһеңдер улай, кеше йыуатырлыҡ дәрәжәлә.*

- *Мин инде таулы ергә етһәк, эсемде эскә үткәштергәнсе тартам да, яйлап ҡына тын бирә башлай торғайным. Өйрәнеп бөтөлгәйне инде.*

- Ағай, алдағы туҡталышта төшөп ҡалырбыҙ ҙа ҡуйырбыҙ, былай булмаҫ, минең дә түҙемем бөттө, - тигән булдым, уның хәленә инеп. Кешенең хәленә инһәң, ыҡҡа килеп, һүҙеңә ҡолаҡ һала бит ул.

- *Һин ни ғүмер буйы бисәләр командиры булғас, кеше яйына төшөнөп бөткәнһең инде.*

- *Ни эшләп бисәләр командиры булды?*

- *Ферма мөдире булды ул. Һауынсылар командиры.*

- *Бер аҙ серем итеп алаһыңмы, тип тә әйткәнһең түгелме ни?*

- Улай тип тә ҡараным. Ҡайҙа ул, тигән була. Ул-был була ҡалһа, уянып та, һикереп тә өлгөрмәм, ти.

- *"Ҡайышын нисек ысҡындырырға бының?" тип һорашҡан түгелме ни?*

- Әлдә һин хәтерлеһең. Мин күбеһен онотоп бөткәнмен шул. Ул-был була ҡалһа, һикереп ҡалырбыҙ. Ҡайышын нисек ысҡындыралар бының, - тип һораша шул ағайым.

- Ҡайышын ысҡындырып тормайһың уның. Ултырғысы менән ҡуша тәкмәсләйһең. Шуның өсөн ҡулайлаштырып эшләгәндәр. Мягкая посадка, тигәнде ишеткәнең бармы? Ана шул ултырғыс менән ҡуша төшөүҙе әйтәләр бит, тием. Тәүҙә мин төшөрмөн, шунан һин һикерерһең, тием.

- *Үҙең дә инде. Былай ҙа шөр ебәреп килгән кешене.*

- Ике генә сәғәт килергә бит Өфөгә. Минутлап булһа ла алдаштырып алып барайым, тип һөйләнгән булам инде. Нисек итеп ҡапыл ғына торорға, нисек тәкмәсләргә - барыһын да ишаралап күрһәтеп һөйләйем ағайға.

- *Үҙенән бигерәк бисәһен, балаларын йәлләп килеүен әйт әле һин уның.*

- Шуға иғтибар иттем шул ағайға. Үҙен иҫкә лә алмай. Әйләнгән һайын балаларым да бисәм, тигән була. "Һинең дә хәлең мөшкөлмө? - тип һораны, икәүләшеп һикерербеҙ тигәс. - Төшәйек, ҡустым, төшәйек. Түҙер әмәл ҡалманы. Был ни, ауҙарып китмәҫ тимә. Тәкмәсләһәк тә, туңҡаңлаһаҡ та - нисек тә ҡалайыҡ берәй туҡталышта" , - тигән булды. Бер аҙҙан Өфөгә лә еттек. "Төштөк, ағай", - тием. Хатта йәһәт йыйынды инде ағайың. Төшкәс, ҡарап торҙо ла: "Аһ, Өфө лә инде, ҡустым, килеп еткәнбеҙ икән дә. Аллаға шөкөр, балаларым ишле минең, ҡустым. Шулар бәхетенә имен генә килдем инде, тигән булды.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**(Дауамы бар).**

*СПОРТ*

# СПОРТТА ЕҢӘМ, ТИҺӘҢ,

## ауырлыҡтарға ҡаршы бар

**"Рауза кеүек матур, әммә энәләре кеүек ҡурҡыныс". Муай тай йәки тай боксы тураһында шулай тип әйтәләр. Был спорт төрө менән яҡындан танышыр өсөн беҙ Башҡортостан Республикаһының "Муай Тай" тай боксы федерацияһы президенты Вилен МУСИН менән "Йәйге каникулдар" ҡала үҫмерҙәр турниры һәм тай боксы буйынса ҡала асыҡ кубогы барышында әңгәмә ҡорҙоҡ:**



**- Нимә һуң ул "муай тай"?**

- Ул тәржемәлә "ирекләләрҙең көрәше" йәки "тай боксы" тигәнде аңлата. 700 йылдан артыҡ йәшәп килгән был көрәш сәнғәте төрөндә традициялар бик ныҡ һаҡлана. Бөтә донъяла ярыштар ритмик музыка оҙатыуында үтә.

**- Тай боксы Башҡортостан өсөн сағыштырмаса яңы спорт төрө, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул бөгөн йәштәр араһында ихтирам яуларға өлгөргән. Бөгөнгө ярышта ҡатнашыусылар менән әңгәмәләшкән ваҡытта муай тайҙың тап ҡатылығы һәм ысынбарлығы менән йәлеп итеүе асыҡланды. Һеҙҙең ҡарашҡа тай боксының матурлығы нимәнән ғибәрәт?**

- Барыһынан бигерәк муай тай йәштәрҙең билдәле бер төркөмөн үҙенең үҙенсәлекле хәрәкәттәре һәм сағыу тамашалы булыуы менән йәлеп итәлер. Әммә бер нисә күнекмәнән һуң уның ҡаты характерын, хәрәкәттәрҙең юғары тиҙлеген һәм бөтә алымдарҙың споррингта әүҙем эшкәртелеүен аңлап, күптәр көйәрмәндәр рәтенә күсеүҙе хуп күрә. Был көнсығыш спорт төрө менән шөғөлләнеү өсөн барыһынан элек үҙеңде үҙгәртергә, ауыртыныуҙарға түҙергә әҙер булырға, ҡурҡыуҙы һәм арыуҙы еңергә, ҙур ҡаланың бик күп күңел әүрәткестәренән баш тартырға кәрәк. Ә бөгөн былар барыһының да хәленән килә торған эш түгел. Ә физик әҙерлектең һәм әхлаҡи-ихтыярлыҡ сифаттарының кәрәкле кимәле күнекмәләр ваҡытында әкренләп үҫә. Ярыштарҙа ринҡа ысынлап әҙерләнгән, үҙҙәренең мөмкинлектәрен реаль баһалаған һәм көрәшкә эстән әҙер булған кешеләр сыға.

**- Тай боксы һәм кикбоксинг араһында ниндәй айырма бар? Тайбоксерҙар бүтән көрәш төрө ярыштарында ҡатнаша аламы?**

- Тай боксының тамыры, башта әйтеп үткәнемсә, быуаттар төпкөлөнә барып тоташа. Кикбоксингка килгәндә, ул егерменсе быуаттың 70-80-се йылдарында барлыҡҡа килгән синтетик көрәш. Кикбоксингта төрлө ҡағиҙәләр буйынса ярыш уҙғарыуҙың күп бүлектәре бар, муай тайҙа иһә көрәшсенең көслө һөжүме һәм дәғүәсеһен тигеҙлек хәленән сығарыусы төрлө алымдар баһаланған бер генә программа төрө йәшәп килә.

Техникаға килгәндә, тай боксында улар рөхсәт ителеп кенә ҡалмай, ә аяҡтар, тубыҡтар, терһәктәр менән һуғыу әүҙем ҡулланыла. Шулай уҡ тик ҡулдар ярҙамында ғына ырғытыуҙар ҡаралған, йәғни ырғытҡан ваҡытта өсөнсө нөктәне ҡулланыу рөхсәт ителмәй. Бил аша ырғытҡан ваҡытта аяҡ салыуҙар тыйыла. Тайбоксерҙар аяҡ һәм ҡулдар менән бәреүҙәр рөхсәт ителгән башҡа төр көрәш ярыштарында уңышлы сығыш яһай.

**- Тай боксында профессионалдар һәм һәүәҫкәрҙәр өсөн ҡағиҙәләр бер төрлөмө?**

- Бында образлы итеп боҙҙағы хоккейҙы үлән өҫтөндәге хоккей менән сағыштырырға мөмкин. Етмәһә, профессионалдар һаҡлау экипировкаһыҙ (ҡалҡан, бирсәткәләр, терһәк ҡалҡансығы, жилет һәм шлемдарһыҙ) сығыш яһай. Уйын тактикаһына спортсылар алдында торған төрлө маҡсаттар һәм бурыстар йүнәлеш бирә. Профессионалдар өсәр минуттан биш раунд уйнаһа, өлкән һәүәҫкәрҙәр икешәр минуттан дүрт раунд һәм үҫмерҙәр ошо уҡ ваҡыт оҙайлығында өс раунд үткәрә.

Ярыштарҙа 12 йәштән алып үҫмерҙәр ҙә ҡатнаша ала. Был ҡаты көрәш төрө менән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа шөғөлләнә, мин үҙем шәхсән был спорт төрө гүзәл заттар өсөн түгел, тип иҫәпләйем.

**- Һеҙ үҙегеҙ муай тайға нисек килдегеҙ?**

- Мин дзюдо, бокс, киокушинкай каратэһы менән шөғөлләндем. Муай тай - ул көрәш сәнғәтенең ысынбарлығы һәм матурлығы, ғәҙеллеге һәм ихласлығы. Һәр хәлдә, ул бик хәрәкәтсән һәм унда шартлылыҡтар юҡ. Рингта һәр ваҡыт иң көслө спортсы еңә. Ошоға бәйле мин үҙемдең тәрбиәләнеүселәремә йыш ҡына бер оҫтаның һүҙҙәрен иҫкә төшөрәм: "Сәскә кеүек матур һәм хәүефһеҙ көрәш сәнғәте бар. Ҡурҡыныс һәм йәмһеҙҙәре бар. Муай тай рауза кеүек матур һәм уның энәләре кеүек ҡурҡыныс".

**- Был спорт төрө менән шөғөлләнергә теләүселәргә ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

- Әгәр көрәш сәнғәтендә үҙегеҙҙе һынап ҡарайһығыҙ икән, ауырлыҡтарҙан ҡасмағыҙ, уларға ҡаршы барығыҙ. Шулай итеп кенә көслө булып була. Һәм ниндәй спорт төрө менән генә шөғөлләнһәгеҙ ҙә, уны күңел һалып, ҙур теләк менән башҡарығыҙ. Шул саҡта, һис шикһеҙ, уңышҡа өлгәшерһегеҙ.

**Рәил МӨХӘМӘҘИЕВ.**
**"БАШвестЪ".**

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

**Бер нисә йыл инде гәзитегеҙҙе бик яратып уҡыйбыҙ, кешеләргә маҡтап һөйләйбеҙ. Бик тәрән мәғәнәле гәзит. Һеҙҙең иғтибарға ике мөнәжәтемде тәҡдим итәм.**

### Был донъяла ниҙәр кәрәк?

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Иманыңа тоғро булыу бик тә кәрәк.
Гонаһтарҙан арынырға барыбыҙға
Хәлебеҙсә ураҙалар тотоу кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Ауыр һүҙҙәр әйтеүҙәрҙән тыйылыу кәрәк.
Күңеленә изге уйҙар бирһен тиеп,
Аллабыҙҙан көн дә ихлас һорау кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Яман эштән йыраҡ булыу бик тә кәрәк.
Упҡындарға төшөрөүсе, хур итеүсе
Хәмерҙәрҙе һемереүҙән ҡасыу кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Изге эштәр ҡылып ҡына йәшәү кәрәк.
Етемдәрҙең, яңғыҙҙарҙың хәлен аңлап,
Саҙаҡалар биреп сауап алыу кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Ҡара сәмдән йыраҡ булыу бик тә кәрәк.
Яҙмышыңа күнеп, оло сабыр менән
Аҡ сәм менән генә беҙгә йәшәү кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Оло ларға ололарса хөрмәт кәрәк.
Кеселәргә үрнәк, өлгө булып беҙгә
Тәүфиҡ менән, сафлыҡ менән йәшәү кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Һаулыҡ, сәләмәтлек беҙгә иң тәү кәрәк.
Фани донъяларҙың ҡәҙерен белеп,
Үкенмәҫлек итеп кенә йәшәү кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Нәфсебеҙҙе, ҡәрҙәштәрем, тыйыу кәрәк.
Бар нәмәнән ҡәнәғәт һәм риза булып,
Шөкөр итә белеп кенә йәшәү кәрәк.

Был донъяла ниҙәр кәрәк, ниҙәр кәрәк?
Ауыр хәлдәр килеп сыҡһа, түҙеү кәрәк.
Бер-беребеҙгә һаулыҡ теләп, ғүмер теләп,
Донъяларҙың йәмен татып йәшәү кәрәк.

**Ғәлимә ӘХМӘТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*Аһ-Аһ!*

**Баҡсала үҫкән кесерткән, бәпембә, дегәнәк, бөтнөк, боланут (иван-чай), кейәү үләне, көтөүсе муҡсаһын сүп үләне, тип, йолҡоп ташларға күнеккәнбеҙ. Ә уларҙа С витамины, башҡа төрлө файҙалы матдәләр күп икәнлеген уйлап та бирмәйбеҙ.**

# ТӘМЛЕ ҺӘМ ФАЙҘАЛЫ...

## сүп үләндәре

● **Көтөүсе муҡсаһында** С витамины петрушкаға ҡарағанда ла күп. Бынан тыш, был сүп үләне каротинға, В2 витаминына, алма һәм лимон кислотаһына, минераль тоҙҙарға, фитонцидтарға бай. Көтөүсе муҡсаһының йәш япраҡтарынан турама яһайҙар, аш бешерәләр, бәлеш өсөн эслек итеп ҡулланалар, ә уның орлоҡтары горчица һәм боросто алыштыра ала.

● **Юл япрағында** каротин, К витамины, лимон кислотаһы, фитонцидтар бар. Уның йәш япраҡтарын үҫемлек турамаларына, ит аҙыҡтарына, эсемлектәргә ҡушырға ярай.

● **Аҡтамырҙың** тамырында углевод, аҡһым, органик кислоталар, каротин була. Аҡтамырҙы ашҡа, турамаларға, төрлө гарнирҙарға ҡушырға мөмкин. Киптерелгән аҡтамыр тамырын бутҡаға, кесәлгә, татлы аҙыҡтарға өҫтәйҙәр.

● **Меңъяпраҡ** дарыу үләне булараҡ ҡына түгел, ә аҙыҡ әҙерләгәндә лә ҡулланыла. Унда органик кислоталар, каротин, К витамины, фитонцидтар күп. Меңъяпраҡтың япрағы тәмләткес булараҡ турамаларға, ит һәм балыҡ аҙыҡтарына ҡушыла.

● **Ҡырҡбыуын** йәки шыршы үләне углевод һәм майҙарға бай. Уны тоҙларға ла, турама, аш һәм бәлеш өсөн эслек итеп ҡулланырға ла ярай.

● **Ҡуян тубығы** турама өсөн яҡшы. Тоҙланған көйө лә ҡулланыла.

● **Ҡаҙ үләне** аштар һәм турамалар әҙерләүҙә ҡулланыла. Был үҫемлекте тамыры менән бергә тәмләткес итеп, төрлө аҙыҡтарға өҫтәйҙәр.

● Витаминдарға бай **алабутаны** турамаларға һәм аштарға шпинат урынына һалалар.

● **Билсән** һәм **шайтан таяғы** кеүек сүп үләндәре лә ашарға яраҡлы икәнен барығыҙ ҙа белмәйҙер әле. Билсәндең йәш япраҡтарын һыуҙа йәки әҙ генә тоҙ өҫтәлгән һыуҙа тотоп, әсе тәмен бөтөргәндән һуң, турамаларға өҫтәйҙәр. Ул ашҡа үҙенсәлекле тәм бирә һәм аппетитты аса. Шайтан таяғын икенсе төрлө ҡыр артишогы тип йөрөтәләр, уның япраҡтарын турамаларға һәм беренсе аштарға өҫтәргә була. Шайтан таяғының тамырында инулин бар, шуға ла уны диабетты дауалағанда ҡулланалар.

**Шулай итеп...**

**Тәбиғәттә "сүп үләндәре" тигән төшөнсә юҡ. Уларҙы аш-һыу әҙерләгәндә ҡулланып өйрәнһәгеҙ, үҙегеҙҙең һаулығығыҙға тик файҙа ғына килтерәсәкһегеҙ.**

*БАҠСА*

# ЯҠШЫ УҢЫШ АЛАМ, ТИҺӘҢ...

## һыу һип, ашлама индер



**Июль айында лә баҡсала үҫемлектәргә һыу һибеү, сүп үләндәре менән көрәшеүҙе дауам итеү мотлаҡ. Бынан тыш, уларҙы өҫтәмә рәүештә туҡландырып һәм төптәрен йомшартып торорға кәрәк булыр. Был айҙа күп кенә ағастар һәм йәшелсәләр емеш бирә лә башлай.**

● Иртә өлгөрөүсе алма, груша, слива, сейә июль башында өлгөрә. Был осорҙа ағастарҙа бер йыллыҡ үҫентеләр барлыҡҡа килә, икенсе йылдың уңышы ошо йәш үҫентеләр менән бәйле икәнен оноторға ярамай. Әҫе һауа йәш япраҡтарҙы йылытып, япраҡ һуты менән туҡланыусы бетсәләргә үрсеү өсөн яҡшы шарттар тыуҙыра. Һәр баҡсасы улар менән көрәшеү кәрәклеген аңлай һәм бының өсөн төрлө саралар ҡуллана. Әммә шуны ла иҫтә тоторға кәрәк: был ҡороҡҡостар ағас япраҡтарынан икенсе үҫемлектәргә, мәҫәлән, сүп үләндәренә күсеп, унда йәй бөткәнсе йәшәй ала. Шуға ла баҡсасыларға иғтибарлыраҡ булыу талап ителә.

Был осорға алмағастарҙың бер йыллыҡ үҫентеләре үҫеүҙән туҡтай. Был процесс үҙ ваҡытында тамамланһын өсөн алмағасҡа һыу һибеүҙе кәметергә кәрәк. Әгәр ҙә көндәр әҫе торһа, һыуҙы аҙлап ҡына һиберге кәңәш ителә. Мул емешле ботаҡтар һынып төшмәһен өсөн уларҙы терәтеп ҡуйырға онотмағыҙ.

Ҡарағат һәм крыжовник емештәрен йыйып алғандан һуң, күбәләк зарарлаған емештәрҙе ергә күмергә кәрәк. Йәй ҡоро килгәндә бер тапҡыр булһа ла ҡурай еләгенә һәм башҡа ҡыуаҡлыҡтарға һыу һибеү мотлаҡ. Төрлө ҡороҡҡостар барлыҡҡа килмәһен өсөн ҡыуаҡлыҡтарҙы ентекләп тикшереп тороғоҙ.

● Баҡса еләген йыйып алып, уларҙы иҫке һәм ауырыу япраҡтарҙан, артыҡ мыйыҡсаларҙан таҙартырға кәрәк. Еләк үҫентеләре араһындағы ерҙе йомшартырға онотмағыҙ. Яҡтылыҡ етерлек төшмәгән урында еләктәр, ғәҙәттә, мүкләнеүсән була. Уларҙы иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай, йыйып алып, баҡсаның ситенә күмеп ҡуйығыҙ, сөнки бындай еләктәрҙә зарарлы бәшмәк һеркәләре туплана.

● Июль айында ҡыяр һәм томат түтәлдәре айырым иғтибар талап итә. Был үҫентеләргә даими рәүештә һыу һибеп торорға кәрәк. Һыу һипкәндән һуң помидорҙарҙың төбөн йомшартыу уларҙың тамырын нығыта, уңыш бермә-бер яҡшыра. Иҫке, һарғайған ботаҡтарҙы алып ташлап тороғоҙ, 20 июль тирәһенә артыҡ ботаҡтарҙы, сәскәләрҙе өҙөп ташлап, эре һәм уртаса помидорҙарҙы йыйып алығыҙ. Был осорҙа помидор үҫентеләрен өҫтәмә рәүештә туҡландыралар. Бының өсөн һыйыр, тауыҡ тиҙәгенә көл өҫтәп, уларҙың төбөнә ҡойоп сығырға кәрәк. Ҡыяр түтәлдәренә марганцовка иретмәһе һибеп торорға, 10 көнгә бер тапҡыр тиҙәк менән ашларға була. Ике көнгә бер тапҡыр уңышты йыйып алып тороғоҙ. Түтәлдәргә һыуҙы көн һайын түгел, ә аҙнаһына ике тапҡыр һибеү яҡшыраҡ.

● Кольраби, төҫлө һәм иртә өлгөрә торған кәбеҫтәне йыйып алалар. Был осорҙа яңынан ултыртылған кәбеҫтә үҫентеләре йәй тамамланғансы өлгөрөп етә. Батун һуғаны, ҡуҙғалаҡ сәсергә була.

Яҡшы уңыш алыу өсөн кишер, петрушка, сөгөлдөр, пастернак, шалҡанды тағы бар тапҡыр һирәгәйтеү мөһим. Ҡабаҡтың артыҡ япраҡтарын алып ташлағыҙ. Уға йышыраҡ һыу һибеү ҡамасауламай.

● Баҡса сәскәләренә, декоратив ҡыуаҡлыҡтарға кәрәгенсә һыу һибәләр, төптәрен йомшарталар. Һулыған сәскәләрҙе өҙөп ташлау мөһим, юғиһә, ул орлоҡлана башлай. Баҡса сәскәләрен йыл һайын яңынан сәсеп тороу яҡшыраҡ, сөнки ҡойолған орлоҡтан үҫкән сәскәләр йылдан-йыл ҡыр сәскәләренә оҡшай бара.

Георгин, гладиолус, мальваларҙы, һынмаһын өсөн, нығытып бәйләгеҙ. Георгиндың төбөнән сыҡҡан йәш үҫентеләрҙе ҡырҡырға кәрәк.

Сәскә атып бөткәс тә, пиондарға ашлама индереп ҡуйығыҙ. Рауза, хризантема һәм башҡа сәскәләрҙе бәшмәк сирҙәренән һаҡлау өсөн аҙнаһына бер тапҡыр 1 процентлы бордос шыйыҡсаһы йәки 0,5 процентлы баҡыр хлорокисы иретмәһе менән эшкәртегеҙ.

# ҠЫҘЫЛ ҠАРАҒАТ...

## ҡартлыҡтан һаҡлай



Ҡыҙыл ҡарағатта пектиндар күп, улар организмдан токсиндарҙы, шлактарҙы сығара һәм шешеү процесы үҫешен туҡтата, ашҡаҙан-эсәк сирҙәренән дауалай.

Билдәле табип-фитотерапевт Ю.К. Манжос ҡыҙыл ҡарағатты күп сирҙәрҙе дауалау өсөн ҡуллана. Был емештең һуты һәм унан яһалған башҡа эсемлектәр файҙалы матдәләргә бай.

Уны шулай итеп яһарға була: 1 литр һыуға 300 г ҡыҙыл ҡарағат һалып, талғын утта йомшарғансы бешерергә, һутын һығып алырға һәм 90 г шәкәр өҫтәп, ҡайнау хәленә килгәнсе, утта тоторға. Һыуытырға һәм 2-3 аҙна буйы ашар алдынан 50 г эсергә.

Ҡыҙыл ҡарағатты үҫтереүе ауыр түгел, ул ҡара ҡарағатҡа ҡарағанда ҡороҡҡа урынды ярата. Яҙ һайын компост һәм ағас көлө менән ашлап торғанда, ул яҡшыраҡ уңыш бирә.

Ҡара ҡарағаттан айырмалы рәүештә, ҡыҙылына һыуҙы аҙыраҡ ҡойорға кәрәк, ул ҡоролоҡҡа бирешмәй һәм емештәре лә ҡойолмай. Дөрөҫ тәрбиәләгәндә (ҡырҡыу, ашлама индереү һ.б.) бер ҡыуаҡ 20 йылға тиклем емеш бирә. Ҡыҙыл ҡарағаттың бер генә ботағын ҡалдырып, ҡалғандарын ҡырҡып торорға ла була.

# ЙӘШЕЛ ТӘМЛӘТКЕСТӘРҘЕ...

## нисек киптерергә

Йәшел тәмләткестәрҙе ҡышҡылыҡҡа һаҡлауҙың иң ябай һәм киң таралған ысулы булып уларҙы киптереү һанала.

Бының өсөн уларҙы һарғайған япраҡтарынан таҙарталар, ентекләп йыуалар. Һуңынан, ҙур булмаған өлөштәргә бүлеп бәйләгәндән һуң, асыҡ тәҙрәле бүлмәгә элеп киптерәләр. Йәшел тәмләткестәрҙе ҡояшта киптерергә ярамай: уларҙың төҫө үҙгәрә, тиҙ онтала. Тәмләткестәрҙе ваҡ ҡына итеп турап, таҙа аҡ ҡағыҙ йәки иләк өҫтөнә һалып киптерергә лә була. Былай итеп укропты, петрушканы, базиликты, майоранды, мелиссаны, бөтнөктө киптереү уңайлы. Тәмләткестәрҙең әҙерлеген ҡул менән тотоп ҡарап билдәләйҙәр. Ҡоро тәмләткесте яҡшы ябылған банкаға һалып, ҡараңғы урынға ҡуйығыҙ, ул тәмен дә, төҫөн дә юғалтмаясаҡ.

Тәмләткестәрҙе газ мейесендә лә киптереп була. Бының өсөн уны турап, табаға йәйеп һалырға. 2-3 сәғәт 35-40 градус температурала киптергәндән һуң, температураны 50 градусҡа (петрушка өсөн - 70) тиклем күтәрергә була.

Петрушка, сельдерей тамырын, кишерҙе киптереү өсөн уларҙы турап, аҡ ҡағыҙ йәйелгән табаға һалғандан һуң, ярым асыҡ мейестә 60-65 градус температурала 3-4 сәғәт (кишерҙе - 5 сәғәт) киптерәһен. Тәмләткестең һәр төрөн айырым киптерәләр, аҙаҡтан бергә ҡушып болғайҙар.

Тәмләткестәрҙе тоҙлап та була. Үҙенә генә хас тәме юғалмаһын өсөн, йәшел тәмләткестәрҙе айырым тоҙлау яҡшыраҡ. Тамырҙарҙы йыуалар, таҙарталар, өлөштәргә бүләләр (кишерҙе ҡырғыстан үткәрергә була). Йәшел тәмләткестәрҙе ваҡ ҡына итеп турайҙар. 1 кг йәшелсәгә 200-250 г тоҙ кәрәк. Тоҙлағандан һуң быяла банкаларға тығыҙ итеп тултыралар һәм ҡапҡас менән ябалар. Бер-ике көн үткәс, тағы ла йәшелсә өҫтәп, өҫтөнә тоҙ ҡатламы һалып, һыуытҡысҡа ҡуялар.

ТӘҮБӘ

***Гәзитебеҙҙең 2003, 2005 йылдарҙағы бер нисә һанында "Тәүбә" рубрикаһында "Мин эсеүемде ташланым" тигән баш аҫтында "Әнүәр Хәлисов" ҡултамғаһы менән яҙмаларым баҫылып сыҡҡайны. Быйыл 19 июлдә минең яңыса, айыҡ тормош менән йәшәй башлауыма 11 йыл тула. Быйыл үҙ асылымдағы миңә 11 йәш. Әйтергә кәрәк, был ваҡыт арауығында илебеҙ, республикабыҙ, милләтебеҙ тормошонда бик күп үҙгәрештәр булып үҙы. Үҙгәрештәр минең тормошома ла ҡағылмай үтмәне. Нисек кенә булмаһын, Булат Рафиҡов иҫкә алған "Шешәбикәне" башҡаса яныма яҡынайтманым. Аллаға шөкөр. Ошо йылдар арауығында үҙ яҙмаларымда бер нәмәлә хаҡлы булыуыма ҡат-ҡат инана киләм: эскелек беҙҙең милләткә үтә алманы, айырым кешеләрҙең генә "сире" булып ҡалды. Элек туйҙарҙа кешеләр йығылып ятып эсһә, хәҙер ҡыҙып алған ҡайһы бер ҡоҙалар эсерер кеше таба алмайҙар. Шулай ҙа йәштәрҙең һыра алкоголизмына бирелеүенә күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Ни өсөн тигәндә, һыранан башланған эскелектән ҡотолоуы ауыр, мөмкин дә түгел, тиҙәр наркологтар. Шулай ҙа эскелек хәҙер ауыҙ тултырып һөйләй торған проблема булыуҙан уҙҙы. Милләтебеҙ үҙ асылына, диненә ҡайта. Яҙмаларым "Киске Өфө"лә 2003 йылда баҫылған саҡта гәзитебеҙ уҡыусылары әҙерәк булыуын, күптәрҙә ул яҙмалар ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуын иҫәпкә алып, мин уларҙы тағы ла гәзит уҡыусыларға тәҡдим итмәксе булдым. Һеҙҙән хаттар көтөп ҡалам.***

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**




**1998 йылдың 19 июль төнө... Донъяға өр-яңынан тыуған көнөм, йәғни төнөм. Ғәжәп, тәүге тапҡыр ҙа мин төндә тыуғанмын. Икенсе тыуған төнөмдө мин "Тәүбә төнө" тип тә атайым. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки мин тап шул мәлдән башлап Шешәбикә ханым менән хушлаштым. Мине юғалтыу ҡайғыһынан үкереп илап ятып ҡалды ул. Был "ҡара яу" афәтенән мин үҙ-үҙемде ҡулға алып, тик ихтыяр көсө арҡаһында ғына ҡотолдом. Тәүге рюмканы ҡулыма 1982 йылда алғайным. Тәүҙә студент ятағында һыранан башланым, яйлап-яйлап шарапҡа, араҡыға күстем. Аҙаҡ, был аҙғын Шешәбикәнең ҡолона әүерелеп, 16 йыл ғүмеремде әрәм иттем. Эскелекте аҙғын ҡатынға сағыштырыуым да юҡтан ғына түгел: ул үҙе һәр саҡ һиңә ҡосағын йәйеп тора, тәм итһәң, күңелле һымаҡ, тормоштағы ҡытыршылыҡтар тигеҙләшә, ә ул: "Тағы, тағы, йә..."- тип ымһындыра. Әммә шул уҡ "ҡатын" иртәгәһен эсеңдә үлеп ятҡан бесәйгә әүерелә. Тышҡа сығып, кире ҡосағыңа ташланыр өсөн йәнә ирендәреңдә тейгеҙеүҙе һорай, талап итә. Саҡ-саҡ ҡына ауыҙға алдыңмы, тәүҙә ҡып-ҡыҙыл булып биткә сыға, аҙаҡ булмышыңа күсеп, тағы ла һиндә йәшәүен дауам итә. Нисек эскене ташларға һуң? Никаһыҙ ҡауышҡан был "албанкы" ҡатындан нисек ҡотолорға? (Беҙҙең яҡта аҙғын ҡатындарҙы албанкы тиҙәр). Ғәҙәттә, эсеүен ташларға уйлаған кеше, үҙендә көс тапмаһа, наркологҡа йә психологҡа бара. Нарколог медицина препараттары менән дауалай, әммә дарыуҙарҙың көсө ваҡытлыса ғына. Психолог иһә һиндә булған ыңғай көстәрҙе уятып, был сиргә ҡаршы йүнәлтә. Әммә психолог туҡтауһыҙ ҡатмарлыҡтар тыуҙырған тормош юлында һәр саҡ янында була алмай. Ә бит кеше ауырлыҡтар алдында үҙ-үҙен еңә алмаған осраҡта рюмкаға ынтыла.Үҙ аллы, тик ихтыяр көсө менән был афәттән ҡотолоу мөмкинме? Үҙемдең тәжрибәнән сығып әйтәм: МӨМКИН! Тәүбә төнөнән алып бөгөнгәсә кисергәндәремде иҫләй торғас, ҡыҙыҡ ҡына яҙмалар барлыҡҡа килде. Үҙҙәре был ҡоллоҡтан ҡотолорға теләп тә, көстәре, ихтыярҙары етмәгәндәргә ошо яҙмаларымды тәҡдим итәм. Бәлки, ярҙамым да тейер. Был яҙмаларымды шартлы рәүештә "Һабаҡтар" тип атаным.**

## 1-се һабаҡ: "Хоҙай өс тапҡыр иҫкәртә".

Аллаһы Тәғәлә кешегә өс тапҡыр иҫкәртеү ебәрә, тиҙәр. Был иҫкәртеүҙәр төрлөсә булыуы бар. Кемдәлер ул йәшәү менән үлем араһына ҡуя, икенселәргә кинәйә генә ебәрә. Саҡ-саҡ үлемдән ҡалғандарҙың был хәлгә көлөп ҡарауҙары аптырата. Тәүгә төнөмә тиклем мин ике тапҡыр иҫкәртеү алғайным инде, тимәк шул кисәтеүҙе ҡабул итмәгән булһам, бөгөн, бәлки, яҡты донъяларҙа булмаҫ инем. Бөтә хикмәт иҫкәртеүҙе аңлауҙа һәм артабан шундай хәлгә ҡалмаҫ өсөн кисекмәҫтән саралар күреүҙәлер. Тәүге ике иҫкәртеү миңә бик ҡаты эскәндән һуң түҙеп торғоһоҙ баш ауыртыу, бахмур синдромы менән килде. Тәүгеһендә телем болғанып, һөйләшә алмаҫ хәлгә килдем, икенсеһендә иҫемде юғалтып ҡоланым. Ике осраҡта ла мин яйлап-яйлап баш төҙәтеү юлы менән аяҡҡа баҫтым. "Шынаны шына менән һуғып сығаралар", тип әйтәләр бындай саҡта.

Өсөнсө иҫкәртеү алдынан өс көн буйына күп итеп һыра, шарап, коньяк, араҡы һемерҙем. Компаниябыҙ ҙа бик елле ине, һуңғы тостарҙы әйткәндә бөтөнләй хәтерләмәйем. Төндә уянып киттем дә, хәлемдең үтә мөшкөллөгөн аңланым: баҡтиһәң, үлемдең эргәһенә үк килеп баҫҡанмын икән. Бер генә аҙым ҡалған, хәҙер аяғыма баҫып китмәһәм, йөрәгем туҡтаясаҡ. Көсхәл менән тороп, бүлмә буйлап йөрөргә тотондом, йөрәк туҡтаған еренән кире эшләй башланы. Һыу эсергә, эсемдәге "үлгән бесәйҙе" һуғарырға иттем. Барманы. Шешә төбөндә ҡалған араҡыны стаканға һалып, еңкергә лә өлгөрмәнем, сайҡалып киттем. Ярамай! Ярты сәғәт самаһы бүлмә буйлап тәпәйләгәс, кире ятып ҡарарға уйланым. Әммә башымды терәүем булды, төпһөҙ упҡынға тәгәрәй яҙҙым. Тағы ла күҙемә үлем күренде, "теге яҡ" та эргәмдә генә яҡшы уҡ күренә, унда инеп китһәң, еңел генә булып ҡалыр һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта был яҡта аңлатып булмаҫлыҡ үкенес ҡала төҫлө. Әле әсәйем, атайым менән хушлашып өлгөрмәгәнмен, балаларымдың башынан һыйпамағанмын. Әммә мин өйҙә бер үҙем, улар минән алыҫта. Миңә ни, ярар, "рәхәтлеккә" сумыр ҙа китермен, һуң уларға ҡыйын буласаҡ бит. Упҡынға сумып уҡ өлгөрмәҫ борон, ҡапыл һикереп аяғыма баҫам да, донъялыҡҡа кире ҡайтҡандай булам. Тағы ла бүлмә буйлап йөрөргә тотонам. "Теге яҡта" шул тиклем рәхәт, был яғы бикбик ауыр икән!

Хәҙер инде һыу эсеү, йә булмаһа, баш төҙәтеү мөмкинлеге бөтөүен тулыһынса аңлар хәлдәмен. Бүлмә буйлап йөрөйөм дә йөрөйөм. Туҡта әле, ятып булмаһа ла, ултырып торыу мөмкиндер. Ултырғысҡа терәлеүем була, йөрәк дөпөлдәй башлай. Тағы ла аяғыма баҫып, мине донъяла әлегә йәшәтеүсе берҙәнбер шөғөлдө дауам итәм - иҙән таҡтаһын шығырҙатам. Башҡаса сарам юҡ...

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уҙышта үҙ-үҙеңде контролдә тотоу кәрәк

**Юғары кимәлдәге технологиялар беҙгә барыһын да күҙ асып йомған арала башҡарырға мөмкинлек бирә. Бөгөнгө тормоштоң етеҙ темпына күнегеп, ҡайһы саҡта бер аҡыл эйәһенең "Ни тиклем тиҙерәк барһаҡ, шул тиклем маҡсаттан йыраҡлашабыҙ" тигәнен аңлап та етмәйбеҙ.**

Ҡуян менән ташбаҡа тураһындағы боронғо мәҫәл был хәҡиҡәтте раҫлай. Оҙон аяҡлы ҡуян алыҫҡа һикерергә һәм ҙур тиҙлек менән алыҫ араларҙы үтеп сығырға һәләтле була. Уның ҙа бер ниндәй ҙә өҫтөнлөккә эйә булмаған ҡусҡарҙан саҡ ҡына шәберәк йөрөгән ҡыҫҡа аяҡлы ҡарт ташбаҡаны үсекләү була. Бер саҡ ташбаҡаны ҡуяндың мыҫҡыллауҙары һәм уның шәп йүгереүе тураһында шапырыныуы шул тиклем ялҡыта һәм ул уны ярышҡа саҡыра. Ҡуян хайран ҡалып ризалаша.

Бына урман йәнлектәренең берәһе старт биреп, һыҙғырып ебәргәс, уҙыш башлана. Ҡуян үҙенең финишҡа иртәрәк барып етәсәгенә тулы ышаныс менән ташбаҡа тирәләй көлөп-маҡтанып йүгереклә. Ташбаҡа иһә уға артыҡ иғтибар бирмәй, ныҡышмалы рәүештә алға барыуын дауам итә, ни тиһәң дә, уға финишҡа тиклем оҙон юл үтәһе бар бит. Ташбаҡаға тәьҫир итмәүен күреп, ҡуян күңел асыр өсөн башҡа нимә эҙләп, юл буйлап ары саба. Яланда тейен баҫтыра, бер нисә ҡуян өңөн ҡарап сыға. Арып китеп һәм ташбаҡаның бер ҡасан да финишҡа барып етмәйәсәгенә ышанып, ҡуян йомшаҡ үләндә бер аҙ серем итеп алырға була. Ә был ваҡыт эсендә ташбаҡа аҙым артынан аҙым эшләүен дауам итә. Ул бик әкрен, әммә алған йүнәлешенә ҡарай бара. Һуңғы сиктә ул юл ситендә йоҡлап ятҡан ҡуянды уҙып китә һәм финишҡа барып етә. Йәнлектәрҙең ҡыҫҡырышып сәләмләүе һәм ҡотлау тауышы ҡуянды уята, ул үҙенең тиҙлегенә һәм шәплегенә маҡтанып, уҙыш ҡағиҙәһен үтәмәйенсә, еңелеүенән оялып, шым ғына урманға инеп һыпырта. Ташбаҡа үҙенең ныҡышмалығы менән бына шулай маҡтансыҡ ҡуянды аҡылға ултырта.

Нимәнәлер тиҙ эшләү һәләте яҡшы сифат булып тора, әммә ташбаҡа менән ҡуян тураһындағы мәҫәл уңышҡа өлгәшеү өсөн тиҙлек кенә етмәүен иҫкәртә. Ысынында иһә, үҙенә саманан тыш ышанғанлығы арҡаһында ҡуян һиҙгерлеген юғалта һәм еңеү өсөн бер ниндәй ҙә көс түгеү кәрәкмәй, тип хаталана. Ташбаҡа, киреһенсә, ныҡышмалыҡ һәм тәртип менән тыумыштан бирелгән әкренлеген аҡлай алған. Ул тыумыштан бирелгән һәләттең ҡыҫҡа арауыҡҡа ғына үҙ ролен уйнай алыуын, ә оҙон дистанцияла булған бөтә мөмкинлектәрҙе тулы көскә файҙаланырға кәрәклеген яҡшы аңлай.

Ә һинең, әйтерһең дә, бер ниндәй ҙә көс һалмайынса, барыһына ла өлгәшкән кешеләргә көнләшеү тойғоһо кисергәнең юҡмы? Һин күпме генә тырышһаң да, бер ниндәй ҙә үҫеш күҙәтелмәгәндә, улар аҡсаһы, матурлығы, һәләте, бәйләнештәре аша еңел генә уңыш ҡаҙана. Әммә һинең нимәгә эйә булыуың түгел, ә булғаны менән нимә эшләүең мөһим икәнен онотма. Иҫ киткес һәләттәргә эйә булған кешеләр, ҡуян шикелле, йыш ҡына фейерверка тиңләшә. Улар үҙҙәренең һәләте менән кешеләрҙе һоҡландыра, әммә уларға сыҙамлыҡ етешмәй. Әгәр һин ташбаҡа кеүек, ҡарашыңды маҡсатта, ә табаныңды ерҙә тотһаң, теләһә ниндәй арауыҡты ла үтеп сыға алаҫаҡһың. Һине тиҙ арала яуланған уңыш ҡыҙыҡтыра ала, әммә "Әкрен, әммә дөрөҫ барыу" тигән әйтемде онотма. Әгәр ҙә тормошта юғары тиҙлек менән алға сабыусы кешене уҙып киткең килһә, аҡыллы һәм маҡсатҡа ынтылыусан ташбаҡанан өлгө ал. Ул ныҡышмалылыҡ һәм үҙ-үҙеңде контролдә тотоу, еңә тигән ҡанундың тере сағылышы булып хеҙмәт итә.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# МОРАҘЫМҒА ИҒТИБАР ЙҮНӘЛТ

**"Киске Өфө" гәзитенең 21-се һанында Миңнулла Әлимғолов (Күгәрсен районы) Мораҙым мәмерйәләре "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында ҡатнашыуға лайыҡ, тип яҙып сыҡҡайны. Шундай уҡ фекерҙә Мораҙым ауылы халҡы ла.**

"Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы туристар өсөн генә түгел, шулай уҡ фән эшмәкәрҙәре өсөн дә үтә әһәмиәтле күренеш ул. Быны дәлилләүсе миҫалдар етерлек. Уларҙы егерменсе быуаттың 70-80-се йылдарында ғалимдарҙың ошо ерлектә үткәрелгән симпозиумдары материалдары, республика йәштәре фестивалдәре, төрлө слеттар үткәрелеү факттары ла раҫлап тора

1977 йылдың июль айында хәҙерге тәбиғәт паркының оло яланында йәйүле туристарҙың I Бөтә Союз слеты уҙғарылды. Унда СССР спортсыларының 29 командаһы, шулай уҡ Башҡортостандан һәм Мәскәү ҡалаһы һәм өлкәһенән 4-әр команда спорт ярыштарында ҡатнашты. Мораҙым тарлауығы аҙнанан ашыу көн-төн музыка, йыр-моңға күмелеп, гөрләп торҙо.

1985 йылдың ғинуарында "Известия Советов народных депутатов СССР" гәзитенең 2-се һанында баҫылған "Куда движется Урал" тигән баш аҫтындағы мәҡәләгә иғтибар итәйек. Унда былай тип яҙылған: "Кугарчинский район с Мурадымовскими пещерами, где отныне разместился башкирский полигон по изучению движения земной коры, выбран для изучения научных исследований не случайно. Здесь находится редкая в геологическом отношении зона, где обнажается массы нижнедевонского возраста. Да и сама поверхность выделенного участка детально изучена нефтяниками. Пробуренные скважины дали ценнейшие результаты, которых нет на аналогичных полигонах страны, расположенных в Крыму и на Памире. Сейчас здесь с помощью лазерных устройств и бурового оборудования предстоит фиксировать горизонтальные движения земной коры". Ошо маҡсатта (90-сы йылдар башына тиклемге осорҙа) СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы (БФАН) ғалимдары менән бергә Рәсәй Фәндәр академияһының Литосфера институты, Свердловск геофизика институты ғалимдарының полигонда фәнни тикшеренеү эштәре менән шөғөлләнеүҙәре беҙгә, Мораҙым ауылы халҡына, яҡшы билдәле.

Мораҙым тарлауығына сығыу өсөн Оло Эйек йылғаһына тимер-бетон күпер һалынды. 1995 йылда уны асыу тантанаһына Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов килде.

Ҡыпсаҡ ырыуҙарының беренсе ҡоролтайы ла ошонда уҙғарылды. Ә инде 1998 йылда Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән тарлауыҡ һәм уның тирәһендәге япраҡлы һәм ылыҫлы ағастарға бай урманды, көмөштәй таҙа һыулы Оло Эйек йылғаһын, ҡаялы мөһабәт тауҙарҙағы 46 мәмерйәне үҙ ҡосағына алған территория тәбиғәт паркы ителгәс, бында килеүсе туристар ағымы һәм Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан, Ырымбур өлкәһенән ҡыҫҡа ваҡытҡа ялда булыусылар бермә-бер артты.

Уникаль тәбиғәтле Мораҙым тарлауығы, мәмерйәләре юғары фәнни, мәҙәни-тарихи һәм эстетик ҡиммәттәргә эйә. Шуға ла был объект "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында ҡатнашырға тейеш, тип иҫәпләйбеҙ.

**Ғәләм ҠОТЛОГИЛДИН,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.**
**Күгәрсен районы Мораҙым ауылы.**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

## БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫНА - 100 йыл!




*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

## "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсы дауам итә

**"Киске Өфө" гәзите менән "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" ижад берекмәһе иғлан иткән "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсы дауам итә.** Конкурс өс этапта үтә. Әле Башҡортостаныбыҙҙағы мөғжизә булырҙай бар нәмәне - тәбиғәт объекттарын, тарихи, мәҙәни, сәнғәт әйберҙәрен барлау бара. Һәр кем үҙе тәҡдим иткән объект тураһында һүҙ әйтә, уны үҙенең дәлилдәре менән яҡлай, тауыш бирә.

Икенсе этапта (ваҡытын хәбәр итербеҙ) тәҡдим ителгән объекттар араһынан 14-е һайлап алынып, артабан уларға тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны -**252-39-99**, **246-03-24**, "Киске Өфө" гәзите сайты - **www.kiskeufa.ru**, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны - **251-73-91**, **251-90-44**, "Сәләм" ижад берекмәһе сайты - **www.saljam.ru** аша ла аткарыласаҡ.

Өсөнсө этапта жюри "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында еңеүселәрҙе билдәләйәсәк. Еңеүселәр махсус ойошторолған кисәлә хәбәр ителәсәк.

**Шулай итеп, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар ҡатнашырға тейеш. Һеҙҙән хаттар, мәҡәләләр көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



ИҒТИБАР!

# З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте тәҡдим итә

**Башҡортса дини календарь.**



2010 йылға "Башҡортса дини календарь" баҫылып сыҡты. Унда Ислам тәғлимәте, мосолман байрамдары, Ай һәм Ҡояшҡа бәйле астрономик мәғлүмәттәр, намаҙ уҡыу ваҡыттары бирелә. Календарҙы төҙөүсе авторҙар шулай уҡ Ҡөрьән аяттары, хәҙистәр, тәрбиә мәсьәләһендәге дәрестәрҙе дауам иттерә. "Башҡортса дини календарь" Ислам дине тарихын өйрәнеүселәргә, киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.

**Әлнисә Алдырханова. Салауат батыр - ил күрке (Салават Юлаев - гордость народа). Салауат Юлаевтың тормошо һәм ижады. Башҡорт телендә.**



Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың әҙәбиәттә, сәнғәттә сағылышын, халыҡ күңелендә тотҡан урынын төрлө яҡлап, хронологик тәртиптә асҡан был ҡулланма башҡорт теле һәм әҙәбиәте, мәҙәниәт, тарих, рәсем һәм йыр уҡытыусыларына, шулай уҡ киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.

**Йырлайыҡ, дуҫтар! (Споемте, друзья!) Популяр йырҙар текстары йыйынтығы. Башҡорт телендә.**



Хөрмәтле йыр-моң һөйөүсе дуҫтар! Был йыйынтыҡтың иң ҙур өлөшөн күптәр яратып башҡарған йыр текстары биләй, шулай уҡ ваҡыт һынауҙарын үтеп, милләтебеҙ хазинаһына әүерелгән халыҡ йырҙары ла хәтһеҙ урын алды, тыуған ер, ата-әсә тураһында һәм мөхәббәт йырҙары ла күңелдәрегеҙгә хуш килер. Был йыйынтыҡ - 2008 йылда сығарылған йыр китабының тулыландырылған һәм яңыртылған баҫмаһы.

**"Тыл ҡаһармандары" (Герои тыла). Урыҫ телендә.**



"Тыл ҡаһармандары" исемле яңы уникаль китаптар серияһының беренсе томы донъя күрҙе. Күп томлыҡ серия Бөйөк Ватан һуғышында еңеүҙең 65 йыллығына арнала. Китап тылдағы фиҙаҡәр хеҙмәте менән фашист Германияһын еңеүгә арҙам иткән кешеләр хаҡындағы иҫтәлекте мәңгеләштереү өсөн нәшер ителә. Награда алған тыл эшсәндәренең исемлектәре Башҡортостан Республикаһының ҡала һәм районлары буйынса алфавит тәртибендә бирелгән. Беренсе томға Әбйәлил, Әлшәй, Архангел, Асҡын районларының һәм Ағиҙел ҡалаһының "1941-1945 й. Бөйөк Ватан һуғышында фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәткән өсөн" наградаһы менән бүләкләнгән эшсәндәренең исемлектәре ингән. Был китап гәзиз Ватаныбыҙҙы тылдағы хеҙмәте менән һаҡлаған атай-олатайҙарыбыҙҙың иҫтәлеген ҡәҙерләгән уҡыусыларыбыҙ өсөн айырыуса әһәмиәтле һәм ҡиммәтле.

**Китаптарҙы түбәндәге адрестар буйынса һатып алырға була: Өфө ҡалаһы, Левченко урамы, 4а; Октябрь проспекты, 2 ("Мир фирмаһы" туҡталышы)**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## Гиңгерләк һынтайым...

Көй башҡарылған музыка ҡоралына ҡарап, бейеүҙәрҙең дә төрләнә була. Әйтәйек, гармунға бейеү, ҡурайға бейеү, ҡумыҙға бейеү, таҡмаҡҡа бейеү, һ.б. Бына беҙҙең яҡта элегерәк "гиңгерләккә бейеү" тигән термин бар ине. Гиңгерләк - ауыҙ гармуны тигән һүҙҙе аңлата булыр. Гиңгерләктә уйнаусы таҡмаҡ та әйтмәй, бары тик "гиңгергиңгер-гиңнәйем, гиңгер-гиңгер-гиңнәйем" йә булмаһа "әлләр-лилләрлилләйем" йә булмаһа "ә-лә-лә-лә, гиңгер-гиңгер, лә-лә-лә" тип һамаҡлап бейеүселәрҙе тыпылдаттыра. "Һынтайым" һүҙе лә бейеүгә бәйле, йәғни донъяһын онотоп бейегән кешене "һынтайым да һынтайым бейей", тип әйтә торғайнылар беҙҙең ауылда.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ТУҠТА, МӘЛ!



**Тәбиғәт ҡосағына - ҡурай һәм... "Киске Өфө" менән.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәрәнә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛДАҠСЫҒА...

## яҡшы хәтер кәрәк

Алдаҡтың аяғы ҡыҫҡа ла, ҡулы оҙон шул.

**(Лех Навроцкий).**

Алдаҡтың аяғы ҡыҫҡа ла, йөҙө бик мөләйем бит әле.

**(М. Путинковский).**

Әгәр ҙә ир-егет ҡатын-ҡыҙға бер ваҡытта ла алдамай икән, тимәк, ул ҡатын-ҡыҙҙың тойғоларына төкөрөп ҡарай.

**(Олин Миллер).**

Һөйгәненә "Алдайһың бит!" тип әйтмә, юҡһа, уның дөрөҫтө һөйләй башлауы бар.

**(Иоанна Вилиньская).**

Алдаҡсыға яҡшы хәтер кәрәк.

**(Квинтилиан).**

Кем дә кем бәләкәй генә алдаҡты оҙаҡ ваҡыт йөшәтә ала, шул иң яҡшы алдаҡсы була.

**(Сэмюэл Батлер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ике юлсы-фәрештә бай бер ғаиләлә төнгөләккә ҡунырға туҡтаған. Ғаилә хужалары бик үк ҡунаҡсыл булмай һәм юлсы-фәрештәләргә һалҡын ғына бүлмәләренән урын бирә. Йоҡларға ятҡас, фәрештәнең өлкәне бүлмә стенаһында бер тишек күреп ҡала ла, уны һылап ҡуя. Кесе фәрештә унан ниңә былай эшләүен һорай. "Әйберҙәрҙең барыһы ла һин тойғанса булмай", тип яуап бирә өлкән фәрештә.**

**Иртәгәһенә улар юлға сыға һәм төнгөләккә ярлы ғына, әммә шул тиклем ҡунаҡсыл хужаларҙың өйөндә туҡтала. Хужалар аҙ ғына булған ризыҡтарынан фәрештәләргә лә өлөш сығара, уларҙы үҙҙәренең түшәгенә йоҡларға һала. Иртән йоҡонан торһалар, өй хужалары илап, ҙур ҡайғыға ҡалып ултыра икән. Сәбәбе - уларҙы ашатҡан да, эсергән дә берҙән-бер һыйырҙары ятып үлгән. Шунда кесе фәрештә өлкәненән:" Ниңә былай килеп сыҡты әле? Беҙ кисә туҡтаған ғаилә бик бай ине, шулай ҙа һин уларға ярҙам иттең. Ә былар бик ярлы булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең менән ризыҡ һәм түшәк бүлеште, ә һин уларҙың берҙән-бер һыйыры ятып үлеүгә юл ҡуйҙың. Ни өсөн?" - тип һораған. "Әйберҙәрҙең барыһы ла һин тойғанса булмай, - тип яуап бирә өлкән фәрештә. - Беҙ бай ғаиләнең теге һалҡын бүлмәһендә булғанда стена артында бик күп алтын һаҡланыуын аңланым һәм шуға ла һаран бай уны тапмаһын өсөн стеналағы тишекте ямап ҡуйҙым. Ә был ғаиләлә йоҡлағанда мин хужаның ҡатыны артынан үлем фәрештәһе килеүен күрҙем дә, уға хужаның һыйырын биреп ебәрҙем. Әйберҙәрҙең барыһы ла һин тойғанса булмай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5481
Заказ 2696